✓ *Тормош ҡануны шулай: бер ишек ябыла икән, икенсеһе асыла. Ләкин бөтөн бәлә шунда: беҙ ябылған ишеккә ҡарап тороп, асылғанына иғтибар итмәйбеҙ.*

*(А. Жид).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

26 ҒИНУАР - 1 ФЕВРАЛЬ (ҺЫУЫҒАЙ - ШАҠАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№4 (526)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Бәхетле балалыҡҡа...**

нимә ҡамасаулай?



4

**Кеше кешеләргә кәрәк булһын...**

Беренселәрҙең ошо һүҙҙәргә тап төшөрмәгәне



6-7

**Унар ғына һумлыҡ, әй, ун аҡыҡ,**

Һалдыр, егет, әйәрең ҡашына



8-9

**Зәйнәб апай һүҙе**



10

14 ТВ-программа


*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Кешене сир йә вирустар ғына түгел, ә уйҙары ла ауырыу итә, тигәнде нисек аңлайһығыҙ?

***Рауфан МОРТАЗИН, космоэнергетика магистры:*** "Киске Өфө" гәзитен даими алдырып уҡыусылар менән "Мөғжизәләр заманы" тигән китап менән яҡшы таныш, шулай булғас, был һорауға минең ни тип яуап бирерҙе лә алдан белеп торалар ҙыр, моғайын. Ләкин ҡабатлауҙан иман яңыра ғына, тигәндәй, әлеге сәләмәт булыу тураһындағы хәҡиҡәтте лә йышыраҡ иҫкә төшөрөп тороуҙан бер зыян да юҡ. Кешенең сәләмәтлеге уның йәшәү рәүешенә генә түгел, ә уйҙарына, кәйефенә, ғөмүмән, психоэмоциональ торошона туранан-тура бәйле икәнлеген иҫбат итеп тороу кәрәкмәй. Мәҫәлән, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарынан ҡала, онкология (яман шеш) үлем сәбәптәре буйынса икенсе урында тора, ти рәсми медицина. Ә инде яман шеш барлыҡҡа килеүенең тәүге сәбәптәре күҙәнәккә тәьҫир итеүсе эске сәбәптәргә бәйле булһа, улар тышҡы агрессив мөхит - ауралағы кире энергия менән туҡланып та яман шешкә әйләнеүе ихтимал. Әгәр кеше үпкәләй, асыулана, ярһый, нәфрәтләнә, йәғни ауранһын кире энергия менән тултыра икән, бындай энергия менән туҡланыусы күҙәнәктәр ҙә агрессивҡа әйләнә. Мәҫәлән, ғаиләһенән айырылған йәш ир, әгәр мин ауырыу булһам, алимент түләмәҫ инем,тип ысҡындыра шулай бер мәл. Һөҙөмтәлә ул, ысынлап та, ауыр сиргә юлыға. Тормоштан бындай миҫалдарҙы бик күп килтерергә була. Сәләмәтлеккә юл - сәләмәт йәшәү рәүеше алып барыу, дөрөҫ туҡланыуҙа ғына ла түгел, ә күп йәһәттән әйләнә-тирә мөхит менән, айырыуса үҙ-үҙең менән тулы гармонияла йәшәргә ынтылыуҙа ла. Күңелегеҙҙә Ер шарына, тәбиғәткә, кешеләргә (яҡшыларына ла, ямандарына ла) яратыу хисе булдырығыҙ, йөрәгегеҙҙе, аурағыҙҙы мөхәббәт менән тултырығыҙ, унда икеләнеүҙәргә, яман, кире уйҙарға урын ҡалдырмағыҙ! Мөхәббәт барлыҡ кире энергетиканы ыңғайға әйләндерә. Күҙәнәктәр, мөхәббәт энергияһы менән туҡланып, агрессив булыуҙан туҡтай, һөҙөмтәлә - кеше һауыға.

***Әнисә ТАҺИРОВА, шағирә:*** Халҡыбыҙ ҙа был турала белмәйенсә әйтмәгәндер, күрәһең, уйлағаның алдыңа килер, тип. Тап шундай заманда йәшәйбеҙ ҙә инде. Яман уйлағы килмәй ҙә бит, ә шулай ҙа әйләнә-тирәңдә булып ятҡан хәлдәргә нисек битараф ҡалмаҡ кәрәк? Әле бына кисә генә радио-телевизорҙы тоҡандырыуым булды, Салауат ҡалаһында булған ҡот осҡос инцидент (бер ҡанһыҙҙың балалар баҡсаһына тоҫҡап ут асыуы) тураһында кем уҙарҙан хәбәр итә башланылар. Көнө буйы, хатта Мәскәү каналдарынан да, фәҡәт ошо хаҡта ғына һөйләнеләр. Ундай хәлдәр һәм хәбәрҙәргә иғтибар итмәй йәшәр өсөн йәнһеҙ робот булырға кәрәктер ул. Әйтеүемсә, заманыбыҙ бик болғауыр, буталсыҡ ваҡытта йәшәйбеҙ. Бәлки, кемдәргәлер кәрәктер ул буяуҙарҙы шулай ҡуйыртып, ҡараңғылатып биреү. Тормоштоң яҡты, матур, гүзәл яҡтарын да күреп өйрәнәйек. Лирик шиғырҙарҙағы кеүек: улар ҙа бит һағыш хистәренән туҡыла, шул уҡ ваҡытта унда яҡтылыҡ, өмөт саткылары өҫтөнлөк итә барыбер. Позитив йәшәү өсөн, минеңсә, әҙәбиәткә, сәнғәткә яҡыныраҡ булыу кәрәктер. Позитив фекерләргә минә, мәҫәлән, әҙәбиәт ярҙам итә. Һәр бер хеҙмәттең үҙ поэзияһы бар. Ике ҡулыңа бер эш табып, шул хеҙмәтен шиғриәт кимәленә күтәреп, шунан ҡыуаныс алып, йәм һәм тәм татып йәшәгән кешенең күңелендә насар уйҙарға урын ҡалмай.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

# ИСЕМ ҠУШЫУ–

## балаға фатиха биреү ул

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тыңлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**




Мәктәптә уҡыған йылдарҙа әле, юл төшөп, бер таныштарыма инергә тура килгәйне. Оло йәштәге хужабикә "имелде лә, имелде", тип йыш ҡабатлағас, һүҙ имсәк имгән сабый тураһындалыр, тип уйлап ҡуйҙым. Әйткәндәй, баш ҡаланан өлкән ҡыҙы ике йәштәр тирәһендәге малайы менән ҡайтҡайны. Шул бала имеҙлек юғалтҡандыр, тип уйлайым. Имеҙлек бирмәнеләр, шулай ҙа өләсәй һаман "Имел, имел" тип ҡабатлай. Баҡтиһәң, ейәнденең исеме Эмиль булып сыҡты.

Өләсәй дөрөҫ өндәшкән: башҡорт тел ҡануны буйынса, әлбиттә, Эмиль "имел" булып яңғырарға тейеш. Бындай ят исемде беренсе тапҡыр ишеткәнгә күрә, халҡыбыҙҙың теленә, ҡолағына ятмаған исемде ни өсөн ҡуштылар икән, тип аптырағайным шунда. Шуғалыр, ныҡ иҫтә уйылып ҡалды был хәл. Йәнә лә, ата-әсәнең яңылышлығы һымаҡ ҡабул иткәнем өсөн әлеге исем милләтебеҙҙә бүтән ишетелмәҫ тип уйлағайным. Баҡтиһәң, бер ҙә улай түгел икән. Йылдар үтте. Хәҙер халҡыбыҙ араһында Эмилдәрҙең артыуын күрәм.

**(Дауамы 3-сө биттә).**

✓ *Баш ҡалала тиҫтә йылдан ашыу йәшәүсе бер танышымдың хатта Милли музейҙағы иҫ киткес экспонаттарҙы ла барып күрмәгәнен ишеткәс, хайран ҡалдым. Үҙеңдең тарихыңа, бөгөнгөңә ҡул һелтәп ҡараумы был?*







БАШ ЙОРТТА...



# МӘРТӘБӘНЕ... халҡы күтәрә

**Гәзит биттәрендә даими рәүештә сығып килгән "Баш йортта" рубрикаһын ҙур ҡыҙыҡһыныу менән күҙәтеп барам. Ҡаланың тышҡы йөҙө, алып барылған төҙөлөштәр хаҡында фекерҙәр уҡыу, Өфөнө тағы ла яҡшыраҡ һәм уңайлыраҡ итеү өсөн әйтелгән төрлө тәҡдимдәр менән танышыу, беренсенән, ҡыҙыҡлы, сөнки был яҙмалар аша баш ҡаланың үҙгәреүенә шаһит булаһың, ә икенсенән, фәһемле, сөнки халыҡтың фекерен тыңлау һәр саҡ кәрәкле һәм урынлы. Был яҙмалар менән ҙур етәкселәр ҙә танышып баралыр һәм фекерҙәргә ҡолаҡ һалалыр, тип ышанам.**

Мин үҙем республиканың алыҫ райондарының берәһендә йәшәйем, шулай ҙа Өфөгә юл төшөп тора. Шуға күрә баш ҡалала йәшәүсе булараҡ түгел, ә килеп йөрөүсе күҙлегенән сығып Өфө хаҡындағы фекерҙәрем менән уртаҡлашырға булдым. Өфө, тәү сиратта, миңә компактлы ғына булыуы менән оҡшай. Миллионлы ҡала иҫәпләнһә лә, республиканың баш ҡалаһы булһа ла, уны машинала урап сығыу бер ни тормай. Әлбиттә, Өфө юлдарын тәү тапҡыр тапаусыға ауырыраҡҡа тура киләләр, ләкин бер үтһәң, икенсе тапҡыр яңылышыу мөмкин түгел. Быға юл ситендәге билдәләрҙең аңлайышлы һәм күп булыуы, асыҡ күренеүе лә үҙ ролен уйнайҙыр, тип уйлайым. Ҡайҙалыр ашыҡҡан, ләкин ҡул аҫтында машинаһы булмаған кеше өсөн дә ҡалала уңайлы шарттар булдырылғанлығын билдәләмәйенсә булмай. Маршрут һәм дәүләт автобустарының күп булыуы, трамвай һәм троллейбустарҙың йөрөп тороуы кәрәкле ергә тиҙ барып етеү өсөн бар мөмкинлектәр ҙә тыуҙыра. Шулай уҡ Өфөлә такси хеҙмәтенең дә ойошҡан һәм сағыштырмаса арзан булыуын билдәләп үтмәй булмай. Өфөнөң тағы ла бер үҙенсәлеге: халыҡтың ихлас булыуы. Юл һораһаң да, кәрәкле ойошма хаҡында белешһәң дә, барыһы ла ентекле аңлатырға тырыша, башҡа ҙур ҡалаларҙағы һымаҡ, "йөрөйҙәр шунда" тигән ҡараш ташлап, үтеп китмәй. Халыҡтың алсаҡлығы, ихласлығы, яҡшы күңелле булыуы ла Өфөгә ҙур мәртәбә өҫтәй.

Өфөгә юл төшкәндә ниндәй ҙә булһа музейға инмәйенсә ҡайтмаҫҡа тырышам. Өфөләләр үҙҙәренә бирелгән ҙур мөмкинлекте баһалап етмәй, минеңсә, сөнки ҡасан барһам да, халыҡтың бик аҙ булыуы күҙгә ташлана. Баш ҡалала тиҫтә йылдан ашыу йәшәүсе бер танышымдың хатта Милли музейҙағы иҫ киткес экспонаттарҙы ла барып күрмәгәнен ишеткәс, хайран ҡалдым. Үҙеңдең тарихыңа, бөгөнгөңә ҡул һелтәп ҡараумы был? Үҙеңдең булмышыңа, йәшәйешеңә битарафлыҡмы? Аңлата алмайым.

Өфөнөң бер урында тапанмай, йылдан-йыл үҫеү темпын арттырыуына, замана менән бергә атлауына ҡарап ҡыуанам. Быны ҡаланың үҙендәге ыңғай үҙгәрештәрҙән сығып та, Өфө тирәләй ҡалҡып сыҡҡан, күбеһенсә йәштәр йәшәгән матур һәм зауыҡлы ауылдарға күҙ һалып та әйтергә мөмкин. Ә йәштәрен ҡайғыртҡан ҡаланың, тимәк, төбәктең киләсәге ышаныслы.

**Фәнүр СОЛТАНОВ.**
**Йылайыр районы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Кешене сир йә вирустар ғына түгел, ә уйҙары ла ауырыу итә, тигәнде нисек аңлайһығыҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Мәхмүзә ҒӘЙНУЛЛИНА, медицина фәндәре докторы, профессор:*** Уй материалләшә, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр бит ул. Даими рәүештә яман уй йөрөтөү, хаслыҡ, үс, көнсөллөк тойғолары кешене сиргә юлыҡтыра. Быны хәҙер рәсми медицинала ла танийҙар һәм фәнни телдә сирҙе материалләшкән стресс тип йөрөтәләр. Ҡытай белгестәре раҫлауынса, яман уйҙар ғына түгел, бәлки һағыш, ҡайғырыу, хатта, ыңғай тойғо булыуына ҡарамаҫтан, үтә ныҡ, самаһыҙ һөйөү хисе лә (страсть) кешене ауырыуға һабыштырыуы ихтимал икән.

Ғөмүмән, кешенең уйҙары менән организмы торошо араһында туранан-тура бәйләнеш булыуы бәхәсһеҙ. Хатта ҡайһы бер уй-тойғоноң аныҡ ҡына берәй ағзаға йоғонто яһап, билдәле бер сир тыуҙырыуы ла мәғлүм. Мәҫәлән, асыу, кемгәләр үс тотоу, кенә ҡыуыу бауырға бәрә, йоҡоһоҙлоҡ, күп ашау (булимия) ашҡаҙан ауырыуҙарына дусар итһә, көнләшеү аутоиммун, йөрәк, яман шеш сирҙәренә килтерә. Күңел төшөнкөлөгө һәм сараһыҙлыҡ тойғоһо пневмония, туберкулез, алкоголизмды тиҙләтһә, ярһыулыҡ, агрессия һәм конфликтлылыҡ ҡан баҫымын күтәрә, йөрәк һәм ҡалҡан биҙе сирҙәренә килтерә. Ауыр уйҙар, үҙ-үҙеңә йомолоу, үпкәселлек бөйөрҙәргә килтереп "һуғасаҡ". Кире, яман тойғоларҙан арыныу өсөн тиҙ генә кәйефегеҙҙе ыңғайға көйләп, яҡшы, яҡты уйҙар тыуҙырыусы нәмәләр, күңелегеҙгә яҡын, яратҡан кешеләрегеҙ тураһында уйлай башлағыҙ, үҙегеҙгә юмор менән ҡарарға өйрәнегеҙ. Күңелегеҙҙә бөтә нәмәгә тыныс ҡарай торған аҡыллы һәм тотанаҡлы берәй кеше образын йөрөтөгөҙ һәм кәрәк саҡта тиҙ генә уны күҙ алдына килтереп, уға оҡшарға тырышыу ҙа ҡайһы саҡ үҙ һөҙөмтәһен бирмәй ҡалмаясаҡ. Яҡшы белгән дуҫтарың менән аралашыу, кино, театрҙарға йөрөү, китап уҡыу, тәбиғәт ҡосағына йышыраҡ сығыу шулай уҡ кешене ауыр уйҙарҙан арындырырға ярҙам итә, күңелде сафландыра, ҡанат ҡуя. Иң мөһиме шулай ҙа яратҡан эшеңде башҡарыу. Күңел ятмаған эш тиҙ ялҡыта, арыта, төшөнкөлөк хистәре тыуҙыра. Аҡса эшләү, тамаҡ аҫырау өсөн дә эшләргә кәрәк, әлбиттә, ләкин бөтә "әтнәкәһе" шунда - ул яратып башҡара торған эш булһын.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2013 йылдың тәүге яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы тамамланып, февралдән уның икенсе яртыһын башларға әҙерләнеп торабыҙ. Был хаҡта киләһе һанда хәбәр итербеҙ. Әле баҫмабыҙға декабрь айында яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән уҡыусыларыбыҙға вәғәҙә иткән бүләктәребеҙҙең кем өлөшөнә сығыуы тураһында белдереп ҡуймаҡсыбыҙ.**

Шулай итеп, **М. Әхтәмовтың "Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"** - Әбйәлил районы Салауат ауылынан Мәрхәбә Ноғомановаға, Ишембай районы Һайран ауылынан Миңһылыу Саҙыҡоваға, Хәйбулла районы Оло Әбеш ауылынан А. Әбделмәновҡа, Белорет ҡалаһынан Рәшиҙә Илтенбаеваға;

**"400 башҡорт халыҡ йыры" китабы** - Хәйбулла районы Байғусҡар ауылынан Мөнирә Моратоваға, Бүздәк районы Ҡаңны-Төркәй ауылынан Наилә Байымоваға, Баймаҡ районы Муллаҡай ауылынан Рәзилә Мәүлетҡоловаға, Әбйәлил районы Үрге Әбдрәш ауылынан Зөлфиә Әхмәтоваға;

**"Башҡортса дини календарь" китабы** - Йылайыр районы Сидоровка ауылынан Зилиә Ҡотоеваға, Хәйбулла районы Мәмбәт ауылынан Йәнбикә Абдуллинаға, Архангел районы Аҙау ауылынан Люциә Сөләймәноваға, Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылынан Фәнисә Байбуловаға, Ярат ауылынан Зәлифә Ҡасҡыноваға, Бөрйән районы Брәтәк ауылынан Сәғит Уразаевҡа, Әбйәлил районы Аҫҡар ауылынан Зөһрә Шөғөроваға, Ишембай ҡалаһынан Р. Шәриповаға, Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан Рима Мәүлетҡоловаға, Күгәрсен районы Хоҙайбирҙе ауылынан Рауил Болғаировҡа;

**Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек" китабы** - Мәсетле районы Йонос ауылынан С. Мөхәрәмоваға, Бөрйән районы Аҫҡар ауылынан Гөлфиә Ибраһимоваға, Йылайыр районы Байғужа ауылынан Динә Ҡоҙашеваға, Нуриман районы Яңы Субай ауылынан Зәйтүнә Ғафароваға, Баймаҡ районы Ярат ауылынан Мәхмүҙә Исламғоловаға, Әбделкәрим ауылынан Нәфиҙә Йомағоловаға, 1-се Төркмән ауылынан Хәлиҙә Әхмәтшинаға, Йылайыр районы Юлдыбай ауылынан Фатима Иҫәндәүләтоваға, Әбйәлил районы Елембәт ауылынан Вәсилә Мәғәфүроваға, Илеш районы Үрге Йәркәй ауылынан Ғәлимә Ғәлиеваға;

**Әхмәр Үтәбайҙың "Мин айыҡ тормош башланым" китабы** - Ауырғазы районы Үтәймулла ауылынан Фоат Ғибаҙуллинға, Күгәрсен районы Мораҡ ауылынан Рая Янбәтоваға, Учалы районы Озерный ҡасабаһынан Нәҡиб Әйүповҡа, Ғафури районы Юлыҡ ауылынан Фәриҙә Дәүләтбаеваға, Ишембай районы Бишҡаҙаҡ ауылынан Рәмзиә Ишкининаға, Әбйәлил районы Атауҙы ауылынан Гөлдәр Ҡаҙаҡаеваға, Ҡырҙас ауылынан И. Абдуллинаға, Мәсетле районы Әбдрәхим ауылынан Сажидә Фәйзрахмановаға, Ҡырмыҫҡалы районы Мурҙа ауылынан Ф. Бикташеваға, Мәләүез ҡалаһынан Д. Килсенбаеваға;

**"Айыҡ туй сценарийҙары" китабы** - Ейәнсура районы Малай Муйнаҡ ауылынан Рәйсә Аҡбашеваға, Баймаҡ районы Ярат ауылынан Гөлсөм Мырҙабулатоваға, Таулыҡай ауылынан Ф. Сағынбаеваға, Стәрлебаш районы Түбәнге Шәкәр ауылынан Рәйлә Замановаға, Бишбүләк районы Аҙнай ауылынан Рәлиә Кирәеваға, Салауат районы Мөрсәлим ауылынан Минзилә Ҡорбанғәлиеваға, Дыуан районы Арый ауылынан Зәйнәб Вәлиеваға, Учалы районы Түбәнге Байрамғол ауылынан С. Фәхретдиноваға, Күгәрсен районы Мораҡ ауылынан Ғәзимйән Аслаевҡа, Мәсетле районы Аҙанғол ауылынан Рафиҡ Закировҡа эләкте.

**Тағы шул.** Баҫмабыҙға 2013 йылдың тәүге яртыһына яҙылырға онотоп ҡалғандар 17 февралгә тиклем яҙылһа, уны марттан алдыра башлаясаҡ. 50665 индекслы гәзитебеҙгә дүрт айға яҙылыу хаҡы 240 һум 16 тин.

**Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Владимир Путин Социаль-иҡтисади үҫеш күрһәткестәренә өлгәшеү мониторингы буйынса комиссияның беренсе ултырышын үткәрҙе. Билдәләнеүенсә, 2012 йыл йомғаҡтары буйынса 14 төбәктең етәүһендә иҡтисад буйынса уртаса күрһәткескә өлгәшелгән. Улар - Башҡортостан, Мордовия, Татарстан, Удмуртия, Пермь крайы, Пенза һәм Ульяновск өлкәләре.

✓"Милли мониторинг хеҙмәте" 2012 йылдың декабренә РФ субъекттары башлыҡтарының мәғлүмәти асыҡлыҡ коэффициенты нигеҙендә медиа-рейтинг әҙерләгән. Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов унда 34-се позицияны биләй. Шул уҡ йылдың ноябре менән сағыштырғанда күрһәткес күпкә үҙгәрмәгән. Ул ваҡытта республика башлығы рейтингта 30-сы урын биләй ине. Рейтинг 500-ҙән ашыу федераль һәм дүрт меңдән ашыу төбәк баҫма - телевидение, радио, баҫма матбуғат, мәғлүмәт агентлыҡтары һәм интернет-киң мәғлүмәт сараларын тикшереү нигеҙендә әҙерләнгән.

✓Федераль дәүләт статистика хеҙмәтенең Башҡортостан Республикаһы буйынса Территориаль органы (Башҡортостанстат) мәғлүмәттәренә ярашлы, төбәктә йәмғеһе 4071 урынлыҡ 25 объект балалар баҡсаһы төҙөлгән һәм реконструкцияланған. 2011 йыл күрһәткестәре менән сағыштырғанда был 4,5 тапҡырға күберәк. 2012 йылда муниципалитеттар тарафынан мәктәпкәсә белем биреү системаһына 1802 урынға 21 балалар баҡсаһы кире ҡайтарылған. Биналарҙы ҡайтанан профилләштереү иҫәбенә 455 урынға алты балалар баҡсаһы сафҡа индерелгән.

✓Республиканың көньяҡ-көнсығыш өлөшөндәге демографик хәл Белоретта БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова рәйеслегендә үткән күсмә кәңәшмәлә тикшерелде. Сарала ҡатнашыусылар тыуым, үлем һәм миграция күрһәткестәрен тикшерҙе. Кәңәшмәлә билдәләүҙәренсә, халыҡ иҫәбе был төбәктә 2010 йылдан 2012 йылға тиклем 251080 кешенән 242579-ға тиклем, йәғни 3,4 процентҡа кәмегән. Тыуым күрһәткестәре лә бер аҙ кәмегән. 2010 йылда 1000 кешегә ул - 18,1, 2011 йылда - 17,4, 2012 йылда 16,7 тәшкил иткән. Әммә дөйөм алғанда көньяҡ-көнсығыш райондарҙа тыуым коэффициенты (15,2) тотош республикалағынан (14,5) юғарыраҡ. Халыҡтың тәбиғи артыуы, Белорет районынан тыш, округтың барлыҡ райондарында күҙәтелә.

✓ *Һуңғы ваҡытта күршеләребеҙҙең дә үҙ шәжәрәһен төҙөүгә ынтылышы барлыҡҡа килеүе һөйөндөрҙө. Тик уларҙың ҡайһылары, бер-ике быуынын белгәндән һуң, тамырҙары башҡортҡа һуҙылғанын күреп, туҡталып ҡалды, тиҙәр.*



*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# БОТАҠҺЫҘ АҒАСТЫҢ...

## күләгәһенә барма

**Ысынлап та, ни өсөн ботаҡһыҙ ағастың күләгәһенә барырға ярамай икән һуң? Ботаҡһыҙ, тик олондан ғына торған ағасты күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ. Ундай ағастың ботаҡтары булмағас, ергә төшкән күләгәһе лә тар ғына, йәғни олоно киңлегендә генә. Ботаҡһыҙ ағастың күләгәһе тар була, шуның өсөн унда барырға ярамай, ботаҡлы һәм япраҡлы тарбағай ағастың ҙур майҙанға төшкән күләгәһендә ял итеп ултырыуға ни етә, тигәнде генә аңлатамы был әйтем? Ҡыҫҡаһы, был әйтемдә тура мәғәнәһендә аңларға тырышыуҙан әллә ниндәй йөкмәтке сығарып булмаҫ төҫлө. Шуға күрә лә был һүҙҙәрҙең төбөнә һалынған мәғәнәне аңлар өсөн уның кинәйәһенә уй йүгертеп ҡарайыҡ.**

Иң башта бихисап ботаҡлы, шау япраҡлы һәм емешле ағасты күҙ алдына килтерәйек. Үҙегеҙҙе шул ағастың күләгәһендә ял итеп ултырам, тип хис итегеҙ. Рәхәтме? Рәхәт. Күләгәме? Күләгә. Еләҫме? Еләҫ. Бер сәғәт ултырҙығыҙ. Ике сәғәт. Өс сәғәт. Ҡояш байығансы ултырҙығыҙ. Иртәгәһенә көнө буйына ял иттегеҙ. Етмәһә, ағас емешле булһа, ауыҙ итергә лә мөмкин. Бер атҡанда ике ҡуян: ял да итәһегеҙ, тамағығыҙ ҙа туя, тимәк. Шунан был ултырыуҙан ниндәй һығымта яһайһығыҙ инде? Ботаҡлы ағастың күләгәһендә ултырыу рәхәт икән, унда хатта тамаҡты ла туйҙырырға була, тиген һығымтанымы? Шулай ғынамы? Улай ғына булһа, бигерәк тә тар мәғәнә һалынған бит был әйтемгә. Урманына ҡарап - ағасы, ағасына ҡарап - емеше, мәғәнәһенә ҡарап әйтеме, тиген һымаҡ. Шулай түгелме?

Бик тә бик булмағас, хәҙер инде иғтибарығыҙҙы тарбағай ботаҡлы, шау япраҡлы ағастың күләгәһенә түгел, үҙенә күсереп ҡарайыҡ. Ағас ағас инде, улар күп төрлө, япраҡлыларға, ылыҫлыларға, емеш бирә торғандарына бүленә. Ағасты ғәрәпсәгә тәржемә иткәндә "шәжәрә" тигән мәғәнә килеп сыға. Р. Кузеев шәжәрәне нәҫел йылъяҙмаһы, нәҫел ағасы тип атау яғында. Халҡыбыҙға Ислам дине килгәнгә тиклем шәжәрә нәсәбнамә, нәсәпхат, силсилә, тайра атамалары менән йөрөгән. Хәҙерге ваҡытта Өфө, Ырымбур, Ҡаҙан, Санкт-Петербург, Мәскәү архивтарында 150-ләп башҡорт шәжәрәләре урын алған. Күп кенә шәжәрәләр ғаилә архивтарында һаҡлана. Бына, шулай итеп, әйтемгә һалынған фекер ебе осонан эләктереп тә алдыҡ, бугай. Булмаһа, тағатайыҡ йомғаҡты, сисер өсөн йомаҡты.

Ырыуһыҙ милләт булалыр ҙа, әммә ырыуһыҙ халыҡ буламы икән? Ә халыҡ инде үҙ дәүләтен төҙөгәндән һуң милләткә әүерелә. Донъяла халыҡ булараҡ формалашыу осорон үтмәгән милләттәр ҙә бар. Ундай милләттәр һәм уларҙың дәүләтселеге барлыҡҡа килеүендә донъяның осраҡлы сәйәси ситуациялары, революциялар булышлыҡ итә. Нимә генә булмаһын, халыҡ ырыуҙарҙан хасил, юҡҡа ғынамы ни, халыҡ һүҙенең урыҫса әйтелешендәге "народ" һүҙенең тамырын "род" йәғни "ырыу" тәшкил итмәй. "Народ"тың туранантура тәржемәһе "ырыуға" килеп сыға, тимәк, халыҡ - ул ырыуға йәғни ырыуҙарға бүленгән берләшмә.

Хәҙерге заман дәүләттәренең айырым өлөштәрен штаттар, ландтар, землялар, округтар, губерналар, өлкәләр, төбәктәр һ.б. алып торһа, боронғо дала цивилизацияһы осоро дәүләттәренең бындай берәмектәрен урҙалар, жуздар, ҡәбиләләр, ырыуҙар тәшкил иткән. Һуғыштар башланһа, һәр жуз, ҡәбилә йәки ырыу, дәүләт башында торған хандың бойороғона ярашлы, яугирҙәрен ҡоралландырып, барлыҡ кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеп, атҡа атландырған. Һәр кемдең мөлкәткә хоҡуғы, социаль хәле ырыуы эсендә хәл ителгән һәм былар барыһы ла шәжәрәгә теркәлеп барған. Хәҙерге заман терминдары менән аңлатҡанда, шәжәрә ул дәүер кешеләренең үҙенең һәм нәҫел-нәсәбенең исемдәре теркәлгән паспорты ла, ундағы пропискаһы ла, йорт кенәгәһе лә, дәүләт органдары менән төрлө мөнәсәбәттәр буйынса килешеүҙәре лә, пенсияға страховка танытмаһы ла, алған белеме һәм билгән вазифаһы хаҡында шәһәҙәтнамәһе лә, страховка полисы ла, йәғни беҙ бөгөн дәүләт менән ниндәй ҡағыҙҙар һәм документтар аша мөнәсәбәт ҡорабыҙ - барыһы ла булған. Айырма шунда ғына: беҙ бөгөн ҡырылмаһа ҡырҡ төрлө документ, танытма, ҡағыҙ йөкмәп йөрөһәк, теге заманда быларҙың барыһын да бер генә ҡағыҙ - шәжәрә алыштырған. Хәҙерге заман эшлекләре әле генә шундай, йәғни барыһын да алыштырған ниндәйҙер социаль картаны уйлап сығарҙы, тик һаман да был ғәмәлгә ашырылмай.

Юғарыла килтерелгән дәлилдәрҙән ниндәй һығымталар яһап була һуң? Һығымталарҙың бер нисәһе түбәндәгесә:

-Хәҙерге ваҡытта ниндәй милләт вәкилдәренең шәжәрәһе бар, булмаһа, уны тергеҙеүгә ынтылышы бар, был үҙ халҡының боронғо дәүләтселеген, ата-олатайҙарының шул дәүләтселектә биләгән урынын, башҡарған эштәрен өйрәнеүгә тиң ғәмәл;

-"Ете быуыныңды таныпбел" тигән талапты үтәргә тырышып ҡына шәжәрәндә өйрәнеү урта белемдең башланғыс кластары кимәле генә, әле инсанға был тәңгәлдә урта мәктәпте тамамларға, артабан юғары белем алыу талап ителәләр;

-"Бер ағас урман түгел" тигәндән сығып ҡарағанда, үҙ шәжәрәһен өйрәнеүсе ата-олатайҙарының тарихи урманын йәғни сығышын билдәләүҙә лә күҙ уңында тотһон. Ағастың тамыры, олоно, ботаҡтары һәм япраҡтарынан тыш, уның үҫкән тупрағы ла, һуғарған дымы ла, һулаған һауаһы ла, иркәләгән ҡояш нуры ла, урманы ла бар. Һуңғы ваҡытта күршеләребеҙҙең дә үҙ шәжәрәһен төҙөүгә, тамырҙарын юллауға ынтылышы барлыҡҡа килеүе һөйөндөрҙө. Тик уларҙың ҡайһылары, бер-ике быуынын белгәндән һуң, тамырҙары башҡортҡа һуҙылғанын күреп, туҡталып ҡалды, тиҙәр.

Ни өсөн ботаҡһыҙ ағастың күләгәһенә барырға ярамағанлығын аңланығыҙмы инде, туғандар? Баҡтиһәң, был әйтемдең аҫтына бик тәрән мәғәнә һалынған икән. Ырыу-заты, нәҫеле, шәжәрәһе булмаған менән мөнәсәбәт ҡорма, күләгәһенә барма, йәғни уның ышығы һиңә ышыҡ түгел, уға таянма, тигәнде аңлата икән был әйтем. Ботаҡһыҙ ағас, ырыуһыҙ, шәжәрәһеҙ кеше ул далалағы ҡамғаҡ кеүек, тамырһыҙ, хәҙер дауыл ҡупһа, хәҙер ауырға торған ҡыу ағас. Ырыуһыҙ һәм шәжәрәһеҙ кеше менән ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ мөнәсәбәте лә ҡорма, уларға ҡыҙ бирмә, ҡыҙ алма, тигән мәғәнә лә һалынған был әйтемгә.

Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре араһында "Ботаҡһыҙ ағастың күләгәһенә барма" әйтеменең бер нисә варианты ла бар, улар: "Атаһы башҡа менән ҡуян аулама", "Заты башҡа менән болан аулама", "Кырғы менән ҡолан аулама", "Айыуға барһаң, ағаң менән бар" һ.б.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

# ИСЕМ ҠУШЫУ–

## балаға фатиха биреү ул

**(Башы 1-се биттә).**

Әлбиттә, уларҙың исемен ҡушҡандан ғына француздың йәки немецтың беҙгә ҡарата ихтирамы артып киткәндер тип уйламайым. Заманында "интернациональ исем" тигән һүҙ, бәйләнеште лә уйлап сығарғандар ине бит. Әммә ундайҙарға бер мулла ҡарттың һүҙҙәре менән яуап бирер инем: "Етмеш йыл буйы Союзда "интернационализм, интернационализм" тип һөйләнәләр ҙә, урыҫтар үҙҙәре бер ҙә сабыйҙарына Әхмәтғәли, Әхмәтвәли тип исем ҡушманылар бит әле".

Шулай ҙа исемдәр аша ҡайһы бер халыҡтарҙың тарихын күҙалларға була икән. Ким, Мэлс һымағыраҡ исемдәр беҙҙең айырым дәүергә бәйән итмәйме ни? Хатта былай ғына түгел: исемгә булған мөнәсәбәт милләт аңының, рухының, психологияһының үҙгәреше сағылдыра. Йылдар үтер, бөгөнгө сабыйҙар Эдик, Эльнар атлы бабайҙар булып йөрөйәсәктәр әле.

Исем ҡушыу мәҙәнилеге тураһында "Киске Өфө"лә лә йыш ҡына яҙалар. Ләкин ҡатнаш ауылдар, ҡасабаларҙа йәшәүсе милләттәштәребеҙ был баҫманы алдырмай, улар "ҡатнашлыҡ" ҡанундарына буйһоноп көн күреүен дауам итә. Исем ҡуша белеү йолаһы, уға бәйле мәсьәләләр ҡүтәрелгәненән белмәүҙәре лә ихтимал әле уларҙың. Нимәне үҙ эсенә ала һуң был ҡанун? Икенсе милләтте абруй итеп күреү, уға яраҡлашыу, улар һымағыраҡ булырға тырышыу, йәғни көсһеҙлөктөң һәм кәмһенеүҙең үҙенсәлекле көҙгөһө был.

Европала бер нисә илдә "һәйбәт яңғырашлы түгел, ят исем" тип ҡайһы бер исемдәрҙе ҡуштырмайҙар. Эйе, закондары бар был турала. Дөрөҫ эшләйҙәр, исем ҡушыу - үҙенә күрә идеология һәм сәйәсәт. Беҙҙә лә ата-әсәләр, өләсәй-олатай, ҡәрсәй-картатайҙар ошо яуаплылыҡты тойһондар, мәсьәләнең етдилеген аңлап ҡараһындар ине лә бит. Нимә генә тимәһендәр, ҡай берәүҙәр беҙҙә барыбер милли исемдәр аша ныҒыраҡ хөрмәт итәләр һәм нығыраҡ танығанлар. Тышҡы яңғырауыҡлылыҡ менән самаһыҙ мауығыу, эске йөкмәткенең, рух донъяһының һайыға барыуына, имандың бүҫкәреүенә ишара. Ибн Ғүмәр тапшырыуынса, Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с) шулай тигән: "Кем ниндәй халыҡҡа оҡшарға тырыша, шул халыҡ менән ҡуша ҡубарыласаҡ". Тимәк, өммәткә хас исем ҡушыу - Аллаһы Тәғәлә алдындағы бурысыбыҙҙы ла үтәү.

Ундырышлы ер һәр кемдә ҡыуандыра. Бәрәкәте, эстә йөшерелгән ҡеүәте китһә, ер ялағасланa. Исемдәр, ниндәйҙер кимәлдә, милләттең эске ҡеүәтен тоҫмалларға, тимәк, уның киләсәген күҙалларға ярҙам итә. Ул баланың төпкө аңына, яҙмышына ла тәьҫир итә. Ҡасандыр Олеся, Оксана тип ҡушылған ҡыҙҙарыбыҙҙың күпселеге Иван һәм Степандарын тапты. Был урында тағы ла нимәләр өҫтәп әйтеү урынһыҙ.

Әйткәндәй, аҙаҡҡы йылдарҙа милләттең, өммәттең ҡотон арттырып, Фатималар һәм Рамаҙанлар күп кенә тыуҙы. Оешондай мәғәнәле исем аша ата-әсә балаһына матур, иманлы яҙмыш васыят итте. Халҡының ҡотон-бәрәкәтен арттырыуҙа был ҙур бүләк түгелме ни? Һәр хәлдә, минә шулай тойола.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА, яҙыусы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓2012 йылдың ғинуар-ноябрь айҙары йомғаҡтары буйынса Башҡортостанда уртаса номиналь иҫәпләнгән эш хаҡы 19868,1 һум тәшкил иткән, йәғни ҡулланыу хаҡтары индексын иҫәпкә алғанда, хеҙмәт хаҡы 9,2 процентҡа артҡан.

✓Республика прокуратураһы мәғлүмәттәре буйынса былтыр юл-транспорт фажиғәләрендә Башҡортостандан 707 кеше һәләк булған, 6313 кеше йәрәхәт алған. Йәмғеһе биш мендән ашыу автомобиль һәләкәте теркәлгән. Республика районлдарында лицензияһыҙ эшләгән йәки автодромдары булмаған автомәктәптәр асыҡланған. Алкоголле эсемлектәр һәм наркотиктар ҡулланған 300-гә яҡын кешенең водитель танытмаһы тартып алынған, 959 кеше дисциплинар, 65 кеше административ яуаплылыҡҡа тартылыған, судтарға бер меңгә яҡын ғариза йүнәлтелгән.

✓Башҡортостанда "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Рәсәйгә һәр бала мөһим" проекты старт алды. Дөйөм федераль проекты тормошҡа ашыра башлау хаҡында партияның төбәк сәйәси советы Президиумының бйылығы төүге ултырышында иғлан ителде. Проекттың төбәктәге координаторы итеп Башҡортостанда Балалар хоҡуҡтары буйынса вәкил Милана Скоробогатова һайланды.

✓БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова "Дима Яковлев законы"н хуплауын белдереп сығыш яһаны. Әлеге закон АҠШ граждандарына Рәсәй балаларын уллыҡҡа алыуҙы тыя. Вице-премьер билдәләүенсә, бөгөнгө көндә республикала 18236 етем бала иҫәпләнә, уларҙың ни бары 1080-е генә бала йорттарында йәшәй. Балаларҙы ғаиләләргә урынлаштырыу өҫтөнлөклө йүнәлештәрҙең береһе булып тора. Һәм был юҫыҡта Башҡортостан ярайһы уҡ уңышлы эшләй - балаларҙың 87 проценты тәрбиәгә бала алған һәм патронат ғаиләләрҙә тәрбиәләнә. Халыҡ-ара уллыҡҡа алыу темаһына ҡағылып, вице-премьер 2011 йылда сит ил граждандарының республиканан - туғыҙ бала, 2012 йылда дүрт бала алыуы хаҡында хәбәр итте. Уллыҡҡа алыусылар иҫәбендә - Италия һәм Канада граждандары. Рәсәй ғаиләләренә 2011 йылда - 250 бала, 2012 йылда, яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, 248 бала урынлаштырылған.

**"Башинформ"дан.**

***✓ Рәсәйҙә ғүмерлеккә тимер рәшәткә артына ябылыусыларҙы тотоу сығымдары көнөнә 1000 һум тәшкил итә икән. Ә беҙ балаларға сыҡҡан сығымдарҙы иҫәпләйбеҙ...***



*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

**Балаларҙы нимә менән генә тиңләмәйбеҙ ҙә, нимә менән генә сағыштырмайбыҙ: улар тормош сәскәһе лә, донъяны йәмләүсе ҡояш та, ҡырыҫ ысынбарлыҡты онотторousы шатлыҡ сығанағы ла, өшөп-туңған күңелдәрҙе ихлас йылмайыуы менән иретеүсе лә, яраланған йәндәрҙе йомшаҡ ҡулдары менән имләүсе лә һ.б. Ә шулай ҙа иң мөһиме - улар беҙҙең киләсәк. Ата-әсәнең генә түгел, ә йәмғиәттең киләсәге. Тимәк, дәүләтебеҙ улар тураһында етди хәстәрлек күрергә тейеш. Рәсәй ысынбарлығынан сығып фекер йөрөткәндә, ниңәлер бюджет сығымдарын экономиялау гелән балалар иҫәбенә тормошҡа ашырылған кеүек: мәғариф системаһы балалар иҫәбенә оптималләштерелгәндәй, хәҙер килеп бер балалар баҡсаһын төҙөп тапшырыу бюджетҡа өҫтәмә ауырлыҡ тыуҙырыуы асыҡланды. Сағыштырыу өсөн бер нисә һанға ғына күҙ һалыу ҙа етә: дәүләт балалар баҡсаһында бер урын 500 - 700 мең һумға барып баҫһа, шәхси балалар баҡсаһында бер урын 260 мең һумға төшә. Шуға ла республика етәкселеге лә, баш ҡала округы хакимиәте лә шәхси балалар баҡсалары селтәрен үҫтереүгә йөҙ бормаҡсы. Был бөгөн етди көнүҙәк темаға әүерелде һәм хакимиәттә беренсе тапҡыр уҙғарылған түңәрәк ҡор һөйләшеүе ошо өлкәгә ҡағылып, ундағы проблемаларҙы асыҡлауға бер аҙым булды.**

# БӘХЕТЛЕ БАЛАЛЫҠҠА...

## нимә ҡамасаулай?

Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов белдереүенсә, алдағы биш йылда демографик күрһәткестәрҙең үҫеше күҙәтеләсәк: йылына 15 мең самаһы сабый тыуыуы фаразлана. Әле рәсми рәүештә 4500 урынға сират булһа, ысынбарлыҡта был һан 10 меңдән ашыу. Шул уҡ ваҡытта, баш ҡалала былтыр 1500 урынлыҡ 10 балалар баҡсаһы файҙаланыуға тапшырылды. Әммә дәүләт балалар баҡсаларына ихтыяжды тулыһынса ҡәнәғәтләндерә алмай. Был йәһәттән проблеманан сығыу юлы тип альтернатив вариант - шәхси балалар баҡсалары һанын арттырыу мәсьәләһе күтәрелә. Быға былтыр 1 июлдән "Рәсәй Федерацияһының "Мәғариф тураһында" Законына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы 10-сы Федераль закон һәм "Рәсәй Федерацияһы субъекттарының закондар сығарыу һәм башҡарма дәүләт власы органдарын ойоштороуҙың дөйөм принциптары тураһында"ғы закондың 26.3 статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы Федераль Закондың көсөнә инеүе лә ҙур этәргес булды. Ҡанунға ярашлы, шәхси балалар баҡсалары һәм мәктәптәр барлыҡ ҡатламға ла "буй етерлек" һәм "кеҫәһенә тап килерлек" булырға тейеш. Йәғни төҙәтеүҙәр балаларҙың мәктәпкәсә һәм дөйөм белем алыу мөмкинлеген киңәйтә. Аныҡлабыраҡ әйткәндә, балалар шәхси балалар баҡсаларында һәм мәктәптәрҙә (әгәр мәктәптәрҙең белем биреүгә аккредитацияһы булһа) бюджет аҡсаһы иҫәбенә белем алыу хоҡуғына эйә буласаҡ. Дәүләт, үҙ сиратында, бындай учреждениеларҙа мәктәпкәсә, башланғыс һәм урта (тулы) дөйөм белем алыуға булышлыҡ итергә бурыслы. Шәхси мәктәптәрҙе - төбәк, ә балалар баҡсаларын муниципалитеттар финансларға тейеш. Аҡса дәүләт һәм муниципаль белем биреү учреждениелары өсөн билдәләнгән нормативтарға ярашлы, төп дөйөм белем биреү программаларын (Федераль дәүләт стандарттары һәм талаптары сиктәрендә) тормошҡа ашырыу талап иткән күләмдә бүленергә, бюджет иҫәбенән ҡапланасаҡ сығымдар аныҡ билдәләнергә тейеш. Улар - педагогтарҙың эш хаҡы, дәреслектәр һәм күргәҙмә әсбаптар, белем биреүҙең техник саралары, уйындар һәм уйынсыҡтар, сығым материалдары. Финанслау граждандарға мәктәпкәсә һәм дөйөм белем биреүгә дәүләттеке булған һәм дәүләттеке булмаған учреждениеларға бүленгән средстволарҙы ҡабат бүлеү иҫәбенә башҡарыла. Бында ата-әсә балаһын дәүләт (муниципаль) балалар баҡсаһына йөрөткәндә ата-әсә түләүен иҫәпкә алғандағы сығымдар структураһы аныҡлана. Төҙәтеүҙәргә ярашлы, был сығымдар баланы ҡарау һәм тәрбиәләүҙе үҙ эсенә ала. Уға мәктәпкәсә белем биреүҙең төп программаһын тормошҡа ашырыу сығымдары инмәй.



Бөгөн Өфөлә 54 шәхси балалар баҡсаһы эшләй, уларға бер йәштән алып өс йәшкәсә 1100 бала йөрөй. Әммә уларҙың ни бары туғыҙы ғына тулы кимәлдә мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы булараҡ лицензияға эйә. Бары уларға ғына мэрия муниципаль заказ нигеҙендә бала баҡсала ваҡытлыса - бер нисә сәғәт кенә була икән - 3800, тулы көн булғанда 11,5 мең һум ҡайтара ала. Шәхси балалар баҡсаларында бөгөн түләү 10-15 мең һум тәшкил иткәндә, был ата-әсәләргә һиҙелерлек ярҙам буласаҡ. Сөнки, статистика буйынса, 10-15 мең һум - урта синыфҡа ҡараған өфөләнең уртаса эш хаҡы. Баланды нисек кенә заманса балалар баҡсаһына урынлаштырырға тырышһаң да, юрғаныңа ҡарап аяҡ һуҙырға тура киләсәк. Шуға ла күпселек уртаса статистик баш ҡала гражданы, ябайлаштырып алғанда, урта хәлләр тип аталған категория өсөн шәхси балалар баҡсалары - хыялдағы ҡом һарайы ғына булып ҡаласаҡ. Ә инде шәхси балалар баҡсаларында белем биреүҙе муниципаль бюджет финанслаған осраҡта, ата-әсәләргә түләү хаҡы айына 5-8 меңгә ҡалыуы ла мөмкин (әммә был да уртаса статистик ғаилә өсөн ҙур сумма булып тора). Түңәрәк ҡор һөйләшеүендә Ирек Ишмөхәмәт улы Истамбулға эш сәфәре ваҡытында уны ҡалалағы шәхси балалар баҡсаларының күплеге аптыратыуын белдерҙе. "Бай һәм ҡеүәтле ил, дәүләт балалар баҡсаларын "ыһ" та итмәй төҙөү ҡеүәтенә эйә ил шәхси балалар баҡсаларына өҫтөнлөк биргән. Беҙгә лә был тәжрибәне ҡулланырға кәрәк", - тине ул. Эйе, шәхси балалар баҡсалары ҡайһы яғы менәндер отошло - унда балалар һаны әҙерәк, тимәк, һәр балаға индивидуаль ҡараш булдырырға, һәр баланың үҙенә генә хас һәләтен үҫтерергә мөмкин. Ләкин... бында, тәү сиратта, ата-әсәләрҙең түләү мөмкинлеген дә иҫәпкә алырға кәрәктер, моғайын. Ни өсөн бөгөн йәштәр балаларын дәүләт балалар баҡсаларына урынлаштырырға тырыша? Бының төп сәбәбе - бер нисә йылға алға планлаштырылған һәм кредит, ипотека "ҡамыты" кейгән ғаилә бюджетының сығымдарын нисек тә булһа арттырмаҫҡа. Әлбиттә, шәхси балалар баҡсаларының һөҙөмтәләре күпкә яҡшыраҡ та булыуы ихтимал, әммә ай һайын алты меңенде сығарып һалғанға ҡарағанда 600 һум түләү еңелерәк.

Икенсе яҡтан, Төркиә Республикаһында дәүләт теле - төрөк теле һәм ундағы хәл-торошто шаблон рәүешендә генә 130 милләт һәм халыҡ вәкиле йәшәгән Башҡортостанға күсереү мөмкин дә түгел. Һәм шәхси балалар баҡсалары селтәрен үҫтереү ҡабат дәүләт теле мәсьәләһенә барып тоташып, ҡабат сәйәси проблемаға әүерелмәҫ, тип бер кем дә әйтә алмай. Әлбиттә, балаларҙы тәрбиәләү, уларға белем биреүҙе эшҡыуарлыҡ объекты итеп ҡарау - башҡа һыймаҫлыҡ хәл, әммә заман үҙе шундай талаптар ҡуйғанда, телебеҙҙе, милләтебеҙҙе һаҡлау йәһәтенән башҡорт эшҡыуарҙарына ла шәхси балалар баҡсалары селтәрен ойоштороуҙы башларға һәм дилбегәне үҙ ҡулдарына алырға кәрәктер.

Эйе, бурыс еңелдән түгел. Хатта яҡын арала төҙөләсәк йорттар беренсе ҡатында балалар төркөмдәрен урынлаштырыуҙы иҫәпкә алып проектланып, йыл һайын баш ҡалала яҡынса 70 торлаҡ йорт файҙаланыуға тапшырыласаҡ, тип фаразланһа ла, шәхси балалар баҡсалары етәкселәре әйтеүенсә, бөгөндән СанПиН нормаларына тап килгән биналар табыу бик ауыр. Шулай уҡ улар алдында кредит алыу, ҡуртымға түләү (40 процент) проблемаһы ла Домокл ҡылысы кеүек аҫылынып тора. Шуға ла, түңәрәк ҡорҙа фекер алышыусылар баш ҡаланың Шәхси балалар баҡсалары ассоциацияһын ойошторорға ҡарар итте. Проблемаларҙы берәмләп хәл итеүгә ҡарағанда, бергәләп хәл итеү отошлораҡ та, уңайлыраҡ та буласаҡ. Ҡала хакимиәте үҙ яғынан барлыҡ проблемаларҙы мөмкин булған тиклем хәл итергә ярҙамлашасағын белдерҙе, әммә ҡануниәт үҙгәреп тора, һәм чиновниктар уларҙы бер нисек тә урап үтә алмай: 2015 йылда ҡуртым түләүҙәренә льготалар бөтөрөлөп, барлыҡ түләүҙәр баҙар хаҡтары менән билдәләнәсәк.

**Әйткәндәй, күптән түгел шундай статистика шаңҡытҡайны: Рәсәйҙә ғүмерлеккә тимер рәшәткә артына ябылыусыларҙы тотоу сығымдары көнөнә 1000 һум тәшкил итә икән. Ә беҙ балаларға сыҡҡан сығымдарҙы иҫәпләйбеҙ...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостанда иғлан ителгән Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы сиктәрендә Өфөлә макулатура йыйыу буйынса "Ҡағыҙ бумы!" акцияһы старт алды. Әлеге ваҡытта "Ҡағыҙ бумы!" Өфө ҡалаһы Киров районының 17 мәктәбендә үткәрелә. Сараның беренсе көнөндә үк Башҡортостан баш ҡалаһының был районында ете тонна макулатура йыйылған. Февралдә эстафетаны Ленин районы ҡабул итәсәк.

✓Өфөлә 2013 йылғы VI Ҡышҡы халыҡ-ара балалар уйындары символикаһы төшөрөлгән сувенир продукцияһы һатыла башланы. Теләгән һәр кем үҙенең сувенирҙар коллекцияһын өҫтәлгә ҡуя торған календарҙар, бәләкәй кеҫә календарҙары, магниттар менән тулыландыра ала. Шулай уҡ шапка, бейәләй һәм шарфтар һатып алырға була. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, VI Ҡышҡы халыҡ-ара балалар уйындары Башҡортостан баш ҡалаһында 26 февралдән 3 мартҡа тиклем үтә.

✓Бөгөнгө көнгә Башҡортостанда йәшәгән 100 меңдән ашыу кеше "Оҙайлы хеҙмәт стажы булған хеҙмәт ветераны" исеме алған. Граждандарҙың яңы льготалы категорияһы республикала 2012 йылдың 1 ғинуарынан индерелде. Яңы категорияға ҡараған хеҙмәт ветерандары һаны төбәктә йәшәгән льготалар менән ҡулланыусыларҙың 22,5 процентын тәшкил итә. Оҙайлы хеҙмәт стажы булған хеҙмәт ветерандары өсөн ай һайын аҡсалата түләү күләме 145,93 һумға тиң. Рәсәйҙә дөйөм билдәләнгән пенсия йәшенә еткән (ирҙәр өсөн - 60 йәш, ҡатындар өсөн - 55 йәш), шул тәртиптә 40 һәм 35 йыл хеҙмәт стажы булған, бер ниндәй ҙә ташламалар менән ҡулланмаған граждандар "Оҙайлы хеҙмәт стажы булған хеҙмәт ветераны" исеме алыу өсөн йәшәү урыны буйынса хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау идаралығына (идаралыҡ бүлегенә) мөрәжәғәт итә ала

✓Өфө районы Советы ҡарары менән Өфө районы хакимиәте башлығы вазифаһына контракт буйынса Михаил Давыдов тәғәйенләнде. Әлегә тиклем ул Өфө ҡалаһы Октябрь районы хакимиәте башлығы булып эшләгәйне.

✓Башҡортостанда юлһыҙ ерҙән йөрөгән мототранспортты файҙаланыу барышында ҡағиҙә боҙоуҙарҙы иҫкәртеү буйынса "Каргиҙәр" айлығы башланды. Ул 21 февралдә тамамлана. Айлыҡ барышына Башҡортостан Республикаһының Үҙйөрөшлө машиналарҙың һәм башҡа төр техниканың техник торошон күҙәтеү буйынса дәүләт инспекцияһы һәм Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге дәүләт инспекцияһы идаралығы контроллек итәсәк.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

Республика башкорт лицей - интернаты
Республиканский башкирский лицей - интернат

# МАТЕМАТИКАҒА БАШЫҢ ЭШЛӘЙМЕ?

## Олимпиадала ҡатнаш!

**Республика башҡорт лицей интернаты Башҡортостан мәктәптәренең 6-сы класс уҡыусылары араһында "Матлет" республика олимпиадаһы үткәрә. Быйыл уның ситтән тороп ҡатнашыу туры 1 мартҡа тиклем дауам итәсәк. Беренсе тур мәсьәләләрен уңышлы сискән уҡыусылар 7 апрелдә лицейҙа үтәсәк икенсе турға саҡырыласаҡ, уларҙың барыһына ла ҡатнашыусы сертификаты тапшырыласаҡ.**

Эштәрҙе рус телендә, ябай шаҡмаҡ дәфтәрҙә башҡарырға. Дәфтәрҙең тышына баҫма хәрефтәр менән уҡыусының фамилияһы яҙыла. Дәфтәрҙең беренсе битенә баҫма хәрефтәр менән:

1) уҡыусының фамилияһы, исеме, атаһының исеме;

2) мәктәптең һаны йәки уның юридик атамаһы;

3) мәктәптең тулы адресы, индексы, телефоны (код менән);

4) уҡыусының өй адресы, индексы, телефоны (код менән);

5) математика уҡытыусыһының фамилияһы, исеме, атаһының исеме, e-mail адресы;

6) мәктәп директорының фамилияһы, исеме, атаһының исеме, ҡултамғаһы, мәктәптең мисәте;

7) e-mail (уҡыусының йәки ата-әсәһенеке).

**Иғтибар!** Дөрөҫ тултырылмаған йәки таный алмаҫлыҡ яҙыулы эштәрҙең тикшереләсәгенә гарантия бирелмәй!

Икенсе биттә (беренсе биттең арҡҡы яғы) мәсьәләләрҙең бирелеү эҙмә-эҙлелеге һаҡлап, яуаптарҙы яҙырға. Мәсьәлә шарттарын күсереп яҙырға кәрәкмәй. Өсөнсө биттән башлап, мәсьәләләрҙе сисеү юлдарын яҙырға. Һәр яңы мәсьәлә сиселеше яңы биттән башланһын.

### Беренсе тур мәсьәләләре:

1. Деревянную рейку размером *2x2x503 см³* распилили на кубики размером *1x1x1 см³* и, добавив еще один такой же кубик, собрали прямоугольный параллелепипед. Найдите измерения *a, b, c* этого параллелепипеда, если про них известно что *a>b>c>1*.

2. Назовем год "счастливым", если в его десятичной записи сумма цифр, стоящих на четных местах, равна сумме цифр, стоящих на нечетных местах (например, *2013* - "счастливый", т.к. *2 + 1 = 0 + 3*). Сколько всего счастливых лет с *2000* по *2222* год включительно.

3.Сумма 11 последовательных целых чисел равна 2013. Найдите эти числа.

4. Найдите сумму:

$$\frac{1}{2\cdot4}+\frac{1}{4\cdot6}+\frac{1}{6\cdot8}+\ldots+\frac{1}{2010\cdot2012}+\frac{1}{2012\cdot2014}$$

5. Из 100 лицеистов, удостоившихся чести принять участие в очередной летней многопредметной школе, на математику хотели бы пойти *35* ребят, на информатику - *30* и на физику - *25*. И на физику, и на математику хотели бы пойти *9* ребят, и на математику, и на информатику - *12*, и на физику, и на информатику - *6*, а на все три предмета - *3*. Сколько ребят не планирует участвовать в летней школе ни по физике, ни по математике, ни по информатике?

6. Натуральное число делится на *20* и имеет *14* различных натуральных делителей (включая *1* и само число). Найдите это число.

7. Коза и корова съедают воз сена за *45* дней, корова и овца - за *60*, а овца и коза - за *90*. За сколько дней съедят воз сена коза, овца и корова вместе?

8. Из прямоугольника *7x10* клеток вырезали прямоугольник *1x6* клеток с надписью МАТЛЕТ, как показано на рисунке. Разрежьте полученную фигуру на две части так, чтобы из них можно было сложить квадрат.




9. Найдите все возможные решения ребуса.

$$\overline{РБЛИ} = 20\cdot\overline{ЛЕТ}$$

Одинаковым буквам соответствуют одинаковые цифры, разным - разные. (Подсказка: всего есть около 10 решений).

10. Семиклассник Азат хочет четыре года подряд (после 7-го, 8-го, 9-го и 10-го классов) каждое лето участвовать в Летней Многопредметной Школе при РБЛИ, причем каждый год он хочет выбирать разные предметы, ни разу не повторяясь. Сколько различных вариантов участия в ЛМШ есть у Азата, если каждый год можно выбрать только один из 5 предметов: математика, информатика, физика, химия или английский язык, а в летней химической школе можно начать участвовать только после 8-го класса?

**Беренсе турҙың эштәрен 450032, Өфө ҡалаһы, Ҡулса урамы (Кольцевая), 74-се йорт адресына 1 мартҡа тиклем ебәрергә.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ТЕЛӘК БУЛҒАНДА...

## бер ҡаҙанға ике баш та һыя

**Өфө ҡала округы Советы рәйесе Евгений Семивеличенконың киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре өсөн уҙғарған матбуғат конференцияһында яңғыраған бер фекере быға тиклем йөшәп килгән "Бер ҡаҙанға ике тәкә башы һыймай" тигән ҡалыплашҡан мәҡәлде юҡҡа сығарҙы. Сөнки былтыр мартта үткән муниципаль һайлауҙарҙа ҡала округы Советына дүрт партия вәкилдәре һайланғайны. "Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә берҙәм, һөҙөмтәле эшләүсе команда булып туплана алдыҡ. Депутаттар тыуған ҡалаһы, уның халҡы мәнфәғәтендә эшләүен аңлай һәм мөмкин тиклем файҙа килтерергә тырыша. Уҙған 9 ай йомғаҡтары буйынса эшебеҙгә ныҡлы "дүртле" билдәһе ҡуйырға мөмкин", - тине Евгений Александрович.**

Әлбиттә, ошо арауыҡта бихисап мөһим мәсьәләләр буйынса ҡарарҙар ҡабул ителгән һәм уларҙы билдәләп китмәү мөмкин түгел: балиғ булмаған өс һәм унан күберәк бала һәм инвалид бала тәрбиәләгән балаларға бушлай ер биреү мәсьәләһе бөгөн уңышлы тормошҡа ашырыла; ҡала һаулыҡ һаҡлау системаһы һаҡлап алып ҡалынды; балалар-үсмерҙәр спорт мәктәптәренең тренерҙары эш урынынан торлаҡ менән тәьмин ителәсәк; йәйге һауыҡтырыу, хеҙмәт һәм ял лагерҙарында эшләүсе хеҙмәткәрҙәр бушлай туҡланасаҡ. Ә инде бюджет, финанс һәм һалымдар буйынса даими депутат комиссияһы ағзаларына эш "муйындан" булды, тиергә лә мөмкин, сөнки былтыр йыл һуңында беренсе тапҡыр өс йылға бюджет ҡабул ителде. Яңы корпус эләккеһенең башланғысын дауам итеп, Йәштәр йәмәғәт палатаһы эшенә яңы һулыш өрҙө.

Әлеге ваҡытта депутаттар һәр ҡайһыһы үҙенең округында һайлаусылары менән осрашып, улар алдында отчет тота. Уларҙың һайлаусылары алдында күрһәтер ҡаҙаныштары бихисап. Сөнки "халыҡ ялсылары" үҙҙәренең төп эшмәкәрлегенән тыш, ултырыштарҙа ҡатнашырға ла, һайлаусыларҙың мөрәжәғәттәре буйынса эшләргә лә, мәрхәмәтлек менән шөғөлләнергә лә өлгөрҙө. Йыл дауамында улар ветерандарға, инвалидтарға, балаларға, социаль һәм мәғариф учреждениеларына ярҙам күрһәтә. Шулай уҡ етем балаларға бирелгән фатирҙарға йыһаз алыу традицияһы ла дауам итә. Был эшмәкәрлек 2007 йылда башлана һәм әлегәсә дауам итә. Әлеге ваҡытта Өфө - ҡала округы Советы депутаттары шәхси аҡсаларына етемдәрҙең фатирҙарын йыһазландырыу менән шөғөлләнгән Рәсәйҙең берҙән-бер ҡалаһы. Был йәһәттән ЛДПР ағзаһы, эшҡыуар Кирилл Бадиков башҡаларға өлгө булып тора. Уның мәрхәмәтлеккә тотонған аҡсаһы өс миллион һумға етә.

Әйткәндәй, быйыл ҡала округы Советы депутаттары корпусында үҙгәрештәр булыуы ла ихтимал. Был инде БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға депутаттар һайлауға бәйле. Статистика һәм алдағы йылдар тәжрибәһе күрһәтеүенсә, ҡала округы Советы депутаттарының күпмелер өлөшө мандатын республика парламентарийы мандатына алмаштырыуы мөмкин.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



## Ашҡаҙан сей яраһы

❖ Был төнәтмә ашҡаҙан һәм бөйән эсәгенең сей яраһын дауалауҙа ҡулланыла. 1 ҡалаҡ ваҡланған андыҙ тамырын 200 мл ҡайнар һыуҙа төнәтергә. Ашағандан һуң, көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡлап эсергә. Бик һөҙөмтәле сара.

❖ 7 ҡалаҡ етен орлоғон кәстрүлгә һалырға, 2 литр һөт ҡойорға. Ҡайнау хәләнә еткереп, талғын ғына утта ултырған һыулы һауытта тағы 10 минут төнәтергә. Һыуытырға, марля аша һөҙөргә һәм һыуытҡыста һаҡларға. Ашар алдынан 30-40 минут алда 1-әр стаканлап көнөнә 3 тапҡыр эсергә. Әҙерләнгән төнәтмәгеҙ ике көнгә етәсәк. Дауалау курсы 1,5-2 ай.

❖ 1 йомортҡа ағы, 1 балғалаҡ шәкәр пудраһы, 1 ҡалаҡ зәйтүн майын туғып, крем эшләргә. Һәр иртә ас ҡарынға 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә. Шулай уҡ ашар алдынан 30-40 минут алда 1-әр балғалаҡ һырғанаҡ майы эсегеҙ. Дауаны 10 тәүлек дауам итергә.

❖ Был ысул гастрит, хатта үтә аҙған сейле яраны яҡшы дауалай. Өс литрлы банкаға ваҡланған андыҙ һалырға һәм ҡайнар һыу ҡойорға, әммә ике стакан һыу һыйырлыҡ урын ҡалдырырға. Бүлмә температураһына тиклем һыуытырға. Шунда уҡ ҡомалаҡ сүпрәһе һәм 1 стакан шәкәр өҫтәргә. 3 тәүлек йылы урында торға. Һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр стакандың өстән бер өлөшө күләмендә эсергә. 10 көн эсергә. Дауаны кәрәк булғанда тағы ҡабатларға.

❖ Һары мәтрүшкә майы эшләргә. 20 грамм һары мәтрүшкә сәскәһенә 1 стакан зәйтүн майы ҡойоп, 40 көн төнәтергә. Ашар алдынан ярты сәғәт алда 1-2 балғалаҡлап көнөнә 2-3 тапҡыр эсергә.

❖ 1-2 ҡалаҡ балан емешен иҙеп, йәйләп 200 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 4 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3-4 стакан эсергә.

❖ Картуф һуты. 10 көн дауамында ашарҙан 30 минут алда ярташар стакан картуф һуты эсергә. Ун көн ял итеп алғандан һуң, дауаны тағы ҡабатлағыҙ.

❖ Иртә яҙ ҡайын бөрөһөн йыйып, ярты литрлы банкаға һалырға һәм өҫтөнә банка тулғансы араҡы ҡойорға. Бер аҙна ҡараңғы урында тоторға. Төнгөләккә балғалаҡ менән эсергә. Сей яра 20 көн эсендә бөтәшә. Дауаланған ваҡытта ас йөрөргә ярамай. Төнәтмә боҙолмай, уны озайлы ваҡыт һаҡларға мөмкин.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

✓ Гимназия-интернат башҡорт мәҙәниәтен, йолаларын һаҡлаған, уҡыусыларҙы уларҙың нигеҙендә тәрбиәләгән уҡыу йорто иҫәпләнә. Милли мәҙәниәт, сәнғәт, әҙәбиәт нигеҙендә тәрбиәләнгән уҡыусы мотлаҡ рухлы булып үҫә.



УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА



# ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ

## Егерме беренсе дәрес: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"

**Дуҫлыҡ һәм үҙ-ара ярҙамлашыу.** "Тормош һабаҡтары" предметы буйынса икенсе класта ла, дүртенсе класта ла һәм кластан тыш уҡыу ҡулланмаһында ла был тема ярайһы уҡ тулы асылған. Икенсе кластағы "Йылан" тигән хикәйәне иҫкә төшөрөргә мөмкин. Ғөмүмән, яҙлау, йәйләү, көҙләүҙәргә сығып, оҙон-оҙаҡ йәшәп ҡайтҡан, һунарсылыҡ, балыҡсылыҡ, игенселек, урмансылыҡ, умартасылыҡ менән шөғөлләнгән башҡорт халҡында йәшәү рәүеше үҙе үк дуҫлыҡты һәм үҙ-ара ярҙамсыллыҡты талап иткән. Күмәк ҡул эштәре, өмәләр үткәреү ауылдарҙа әле лә дауам итә. Бергәләшеп бесән, утын әҙерләү, картуф ултыртыу-ҡаҙыу, кәзә тарау, һарыҡ йөнө ҡырҡыу, һуғым һуйыу, ҡышҡылыҡҡа һыйыр ағы әҙерләү һәм башҡа шундай эштәр һәр ваҡыт бергә-бергә башҡарылған һәм өмәләр әле лә дауам итә. Оло эштәр башҡарған саҡта фәҡәт үҙ көсөңә генә ышаныу ярамағанлығын, фекерҙәштәреңдең, дуҫ-иштәреңдең ярҙамынан баш тартмауҙың мөһим булыуын халыҡ "Урал батыр" эпосында бик тапҡыр итеп төшөндөрөп үтә. "Бер тигәс тә ни яман?" тип, белгән мәҡәлдәрен әйттереп, сәсәнлектә ярыш үткәрергә мөмкин.

## Егерме беренсе дәрес: "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре"

**Дини ритуалдар, йолалар.** Был тема ҡатмарлы. Шуның өсөн дә ике тулы дәрес бүленгән. Уҡыусы барыһын да үҙләштерә алмаған хәлдә лә төп тәғлимәттәрҙе, бигерәк тә үҙенә яҡын дини тәғлимәттәрҙе, йолағәҙәттәрҙе иҫендә ҡалдырһын өсөн, ҡыҫҡаса яҙып ҡуйыу яҡшы булыр:

Христиан диненә - сиркәү, Евхаристия-сер йолаһы, йәкшәмбе көн сиркәүгә йыйылыу хас; Исламға - мәсет, биш намаҙ, йома намаҙы;

Йәһүд диненә - синагога, көнөнә өс тапҡыр доға ҡылыу, аҙна һайын Шәмбе йолаһы башҡарыу хас; Буддизмға көн һайын мантра-доға уҡыу, йондоҙнамә менән эш итеү, боронғо көнсығыш календарына ярашлы яҙмыш юрау хас.

## Егерме беренсе дәрес: "Донъяуи этика нигеҙҙәре"

Ояла белеү менән оялсанлыҡ төшөнсәһенең айырмаһын аңлатырға кәрәк. Кеше яңылышмай булмай. Иң мөһиме - үҙ ғәйебеңде таныу. Телдән әйтмәгән ваҡытта ла ғәйебеңде танығанлығың беленһен. Ҡайһы бер бала ғәйебен таныһа ла, телдән әйтеп ғәфү үтенмәй. Әммә уның бөтөн булмышында, ҡиәфәтендә яңылышлығы өсөн үкенгәнлеге, намыҫлылыҡ, ғәйебен таныуы һиҙелеп тора икән, һис кисекмәҫтән кеше алдында ғәфү үтенеүен талап итергә ярамай. Әлбиттә, балала ғәйебен танығандан һуң ғәфү үтенеү ғәҙәте бар икән, ул ғәфү үтенер. Әммә иң мөһиме - бала үҙенең ғәйепле булыуын аңлаһын, эстән тойһон. Башҡортта оятһыҙ тигәнде битһеҙ һүҙе менән дә атайҙар. Шуның өсөн: "Битһеҙ бүркен баҫмаҫ", тигән мәҡәл бар. Тимәк, кешенең үҙен тотошона ҡарап та ни тойғанын аңлап була. Ояла белгән, үҙ ғәйебен таныған кеше ҡарашын йәшерә, бүркен батырыбыраҡ кейеп, күҙҙәрен күрһәтмәҫкә тырыша. Ә намыҫһыҙ, ояла белмәгән кеше хатта ҡарашын да йәшермәй, бүркен дә баҫып киймәй.

Әммә оялыу менән оялсанлыҡты бутарға ярамай. "Оялсан туйҙан мәхрүм ҡалған", тигән мәҡәл бар. Үҙ фекереңде, ҡарашыңды, намыҫыңды, мәнфәғәтеңде яҡларға ла оялаһың икән, мәҡәлдәгесә, туйҙан мәхрүм ҡалыуың ла ихтимал. Туй - ул тура мәғәнәһендә түгел, ә тантана, оло байрам, тигәнде аңлата мәҡәлдә. Әммә оялмау менән әрһеҙлекте, әҙәпһеҙлекте лә бутарға ярамай. Халыҡ әҙәпһеҙлекте иң насар сифаттарҙан һанаған. "Әҙәпһеҙлеккә ниндәй сифаттар инә?" - тигән һорау биреп, әңгәмә үткәреү яҡшы булыр.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ЙӘШТӘР ҠОРО

**Балаға мәктәптә уҡыған сағында уҡ үҙенең талантын һәм ижади һәләттәрен үҫтереү мөмкинлеге биргән социаль шарттар тыуҙырғанда ғына кешелек алға китәсәк, шул саҡта ғына илдең киләсәге ышаныслы ҡулдарҙа буласаҡ, ти белгестәр. Бөгөн беҙ йәштәр ҡорона тап ошондай уҡыу йорттарының береһе тип иҫәпләнергә лайыҡлы булған Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының XI класс уҡыусыларын саҡырҙыҡ. Был гимназияла белем алыу йәш быуынға нимә бирә? Уны башҡа мәктәптәрҙән айырып торған үҙенсәлеге нимәлә? Ошо һорауҙарға гимназияның төрлө конкурстар еңеүселәре, уҡыу алдынғылары - бейеүсе Ғәлиә Байбулатова, йәш шағирә Айгүзәл Бикәнәсова, кисәләрҙе алып барыусы Гөлшат Әхмәтшина, ҡурайсы һәм бейеүсе, РФ Президенты стипендиаты Айназ Низаметдинов, ҡурайсы, ЮНЕСКО клубы президенты Мөхәмәт Уразбаев яуап бирә.**

# КЕШЕ КЕШЕЛӘРГӘ КӘРӘК БУЛҺЫН...

## Беренселәрҙең ошо һүҙҙәргә тап төшөрмәгәне

**➔ Был гимназияла уҡырға күптәр хыяллана. Һеҙ ҙә унда хыялдарығыҙға эйәреп килдегеҙме?**

**Ғәлиә:** Мин үҙем Сибай ҡалаһынан. Был данлыҡлы уҡыу йортонда уҡырға тигән хыялым бар ине, әсәйем дә ҡаршы төшмәне теләгемә. Килдем дә, ике аҙна буйына әсәйемә шылтыратып, мине алып ҡайт, тип иланым. Ярай, был сиректе бөткәнсе генә түҙ ҙә, ҡайтырһың, ти әсәй. Был ваҡытҡа иһә гимназияла төрлө конкурстар башланып китте, гимназист итеп ағышлау кеүек ҡыҙыҡлы саралар үткәрелде. Оҡшап китте. Ярай, әсәй, мин Яңы йылға тиклем ҡалам да, ҡайтырмын, тигән булам. Әсәйем минең менән ризалаша, белеп тора бит инде ташлап ҡайтмаясағымды. Артабан иһә кластарҙы профилдәр буйынса бүлделәр, һәр кем үҙе теләгән йүнәлеш буйынса тәрәнәйтеп белем алырға тейеш, тинеләр. Унан һуң, яҙыусылар, шағирҙар, артистар менән генә түгел, башҡа билдәле кешеләр, вуз ректорҙары, дин әһелдәре менән осрашыуҙар. Ошондай уҡыу йортонан кем биҙерәһен дә, кем ҡайтып китһен инде!

**Айгүзәл:** Мин һигеҙенсе класҡа тиклем Ауырғазы районының Талбазы башҡорт гимназияһында уҡыным. Атайым үҙе ошо 1-се гимназия-интернатта белем алғанлыҡтан, мине лә бында уҡытырға теләй ине. Уларҙың класташтары менән һаман да дуҫ булыуҙарына, йыш ҡына осрашып тороуҙарына һоҡлана ла, ҡыҙыға ла инем. Етмәһә, атай форсаты сыҡҡан һайын 1-се гимназияға бәйле төрлө ҡыҙыҡ ваҡиғалар һөйләй. Шулай ошо уҡыу йорто минең дә хыялыма әүерелде. Бында уҡый башлағас, атай-әсәйем күҙ алдына ла килтермәгән һәләттәрем асылды.

**Айназ:** Әгәр мин был уҡыу йортонда уҡымаһам, саф башҡортса һөйләшергә өйрәнә алмаҫ инем кеүек. Тыуған ҡалам Учалыла шарттар барыбер икенсерәк бит инде. Ғаилә мөхитендә үҙ телебеҙҙә һөйләшеп үҫһәк тә, мәктәптәге мөхит тә тәрбиәләй бит беҙҙе, ә унда, бигерәк тә ҡала ерендәге мәктәптә, туған телдә бик һөйләшеп бармайҙар.

Гимназиябыҙҙа балаларҙың һәләттәрен үҫтереүгә шул тиклем ҙур көс һалына: спорт менән шөғөлләнә, ҡурайҙа уйнарға өйрән, бейе,



үҙеңде артист буларaҡ һынап ҡара - бары тик үҙеңдең теләгең булыуы ғына шарт. Былардан тыш, гимназия-интернат башҡорт мәҙәниәтен, йолаларын һаҡлаған, уҡыусыларҙы уларҙың нигеҙендә тәрбиәләгән уҡыу йорто иҫәпләнә. Милли мәҙәниәт, сәнғәт, әҙәбиәт нигеҙендә тәрбиәләнгән уҡыусы мотлаҡ рухлы булып үҫә.

**Мөхәмәт:** Тимәк, гимназия уҡыусыларының һәр береһенең атаәсәләре алдынғы ҡарашлы, алыҫҡа ҡарай белгән кешеләр, тип иҫәпләнергә хаҡлы. Ысынлап та, гимназияла һәр уҡыусы үҙ талантын аса ала, үҙеңде үҫтереү өсөн бөтөн мөмкинлектәр бар. Мин гимназияла эшләп килгән "Аҡмулла" ЮНЕСКО клубының президенты булып торам. 2012 йылдың йәйендә Американа булып, бай тәжрибә туплап ҡайттым, алтынсы йыл инде Екатеринбургта урынлашҡан ЮНЕСКО ассоциацияһының үҙәгендә стажировкалар үтәбеҙ. Быйыл февраль-мартта Санкт-Петербург, Минск һәм Мәскәүгә барырға планлаштырабыҙ. Был клубтың маҡсаты ябай - ул уҡыусыларҙа лидерлыҡ сифаттарын үҫтерергә ярҙам итә. Быға төрлө тренингтар, әңгәмәләр аша өлгәшәбеҙ. Клубтың биш уҡыусыһы халыҡ-ара кимәлдәге дипломға эйә. Беҙгә бындай мөмкинлектәр тыуҙырған өсөн мәктәп хакимиәтенә, бигерәк тә беҙҙе һәр ерҙә, һәр ҡасан атайҙарса хәстәрләгән директорыбыҙ Әлфир Сулпан улына айырым рәхмәтебеҙҙе әйтәбеҙ.

**➔ Гимназияға тәүге аяҡ баҫҡан көнөгөҙҙө, тәүге тәьҫораттарҙы, иң һоҡландырған йәки аптыратҡан мәлдәрҙе хәтерләйһегеҙме?**

**Гәлиә:** Беҙ етенсе класты тамамлар алдынан гимназияға килеп имтихан бирҙек, бер аҙна интернатта йәшәп ҡараныҡ. Гимназия үҙе бер ҡаласыҡ кеүек булып иҫтә ҡалғайны, хатта башта унда аҙашып та йөрөнөм әле. Һәр бер кеше үҙенсә ҡыҙыҡ тойолдо. Мәҫәлән, асыҡ күңелле, гел шаярып, ырғанлап, бейеп йөрөгән Айназды беренсе тапҡыр күреп, шундай ҙа кеше була икән, тип аптырағайным. Уҡырға килгәс, уларҙың һәр береһе яҡын дуҫыма әйләнде. Әйткәндәй, минең бер ҡасан да былай күп дуҫтарым булғаны юҡ ине. Һәр береһе ышаныслы, әскерһеҙ, иғтибарлы, бөтөн һорау менән уларға мөрәжәғәт итергә була.

**Айгүзәл:** Мин гимназияла уҡый алмам, тип ҡурҡа инем. Класта балалар күп, уҡытыусылар минән һорап өлгөрмәҫтәр инде, тип борсолғанымма бөгөн көлкөм килә. Беҙгә, ауыл балаларына, ҡайһы бер предметтарҙы русса аңлауы бик ауыр. Ә беҙҙең уҡытыусылар, ошоно күҙ уңында тотоп, дәресте русса ла, башҡортса ла аңлата. Уларҙың ике телде лә яҡшы белеүе һоҡландыра. Бәләкәй кластар менән оло кластар араһында мөнәсәбәт оҡшай миңә бында. Ҡасандыр, 8 класта уҡығанда, мине 11-се кластағылар йыуата, ярҙам итә ине, хәҙер мин, үҙ тәжрибәмдән сығып, бәләкәстәргә кәңәштәр бирәм, уларға таяныс булырға тырышам.

**Мөхәмәт:** Ҡыҙҙар дөрөҫ әйтә, гимназияға килеп ингәс тә, үҙең өсөн бөтөнләй яңы донъя асаһың. Матур бина, саф башҡортса һөйләшкән балалар - мин бындай уҡыу йорто барҙыр тип уйламай ҙа инем, сөнки үҙемдең тыуған ҡалам Мәләүездә башҡорт балалары менән аралашыу мөмкинлеге һирәк ине. Мин уҡырға ярты йыл тирәһе һуңлап килдем. Беренсе көндә коридорҙа балалар минең менән "Һаумыһығыҙ", тип иҫәнләшә. Аптырайым да, йөрөй бирәм. Бәхтиһән, улар мине яңы уҡытыусы килгән тип уйлаған икән.

**Гәлиә:** Башта минең менән дә ошоға оҡшаш ҡыҙыҡлы ваҡиға булды. 8-се класта мине староста итеп һайлап ҡуйҙылар. Ял көнө дәрес әҙерләгәндә тәрбиәсе килде лә кластағы уҡыусыларҙы һанай башланы, ә мин, староста булараҡ, уҡытыусының урынында ултырам. Класта егерме кеше ине. Тәрбиәсе ун туғыҙ тип һанай ҙа, минән "Ҡайҙа тағы бер бала?" тип таптыра. Тәрбиәсе мине практикант, тип уйлап, иҫәпкә индермәй икән...

**Гөлшат:** Гимназия территорияһына килеп ингәс тә Рәми Ғариповтың шиғыры яҙылған бағана тора. "Кеше кешеләргә кәрәк булһын..." Ошо һүҙҙәр иғтибарымды баштан уҡ йәлеп иткәйне, әле гимназияибыҙ уҡыусыларының ошо һүҙҙәргә тап төшөрмәй, бер-береһенә кәрәк булып, дуҫ йәшәүенә ҡыуанам. Гимназияны тамамлағас та ошо йылы мөнәсәбәттәрҙе һаҡлай алырбыҙ, тип ышанам.

**➔ Тимәк, был гимназия-интернат белем һәм тәрбиә биреү йәһәтенән башҡа уҡыу йорттарына өлгө булып тора, тип иҫәпләргә мөмкин инде?**

**Айгиз:** Быны тулы ышаныс менән әйтергә була. Гимназиябыҙҙа иғтибарҙан ситтә ҡалған бер нәмә лә юҡ. Уҡыусыны төрлө яҡлап үҫтереү, уны тәрбиәле итеү өсөн барыһы ла эшләнә. Эшләгән йәки эшләмәгән эшебеҙ өсөн үҙебеҙ яуап бирәбеҙ икәнен гел хәтерҙә тотабыҙ. Тәрбиәселәр беҙҙең өсөн икенсе әсәйгә әйләнеп бөттө инде.

**Гөлшат:** Гимназияла белем алһаҡ, ятаҡта ысынлап та үҙаллылыҡҡа өйрәнәбеҙ. Эргәбеҙҙә атай-әсәй юҡ, берәй мәсьәлә килеп сыҡһа, үҙебеҙ хәл итергә тырышабыҙ, ошо рәүешле студент тормошона ҙур әҙерлек бара, тип уйлайым мин.

**Мөхәмәт:** Был белем усағының үҙенә генә хас традиция-йолалары бар. Мәҫәлән, беҙ көн һайын иртән, һауа торошоноң ниндәй һәм иртәнге йоҡоноң тәмле булыуына ҡарамаҫтан, күнекмәләргә сығабыҙ. Бер кем дә был шөғөлдән ситтә тороп ҡалмай.

**Айгүзәл:** Бәлки, кемдер ситтә тороп та ҡалыр ине, гимназия директоры Әлфир Сулпан улы Ғайсин ун биш минуттан ете тула тигәндә гимназияла килеп, ятаҡҡа инеп, малайҙарҙы уята. Үҙе беҙҙең менән бергә күнекмәләр эшләй, "Ҡыҙҙар, яңы көн башлана, йүгерегеҙ, нимә йоҡлап тораһығыҙ?" - тип, беҙҙә тотош көнгә етерлек дәрт уята.

**Гәлиә:** Гимназияла беҙ үҙебеҙҙе ҙур бер ғаилә ағзалары итеп тоябыҙ. Сибайҙа уҡығанда бер мәктәптә, бер класта уҡыһаҡ та балалар менән беребеҙгә үтә яҡын түгел инек. Бында беҙ бер туғанға әйләнеп бөттөк инде.

**Мөхәмәт:** Иң ҡыҙығы, бер-береңдән бер ҡасан да ялҡмайһың, кереһенсә, бер-береңдән башҡа йәшәй алмай башлайһың.

**Айназ:** Тормошта иң мөһиме - ғаилә икәнен барыбыҙ ҙа белә. Гимназия, ысынлап та, ҙур бер ғаилә һымаҡ, унда һәр беребеҙ үҙенең урынын белә, йәшәргә өйрәнә. Гимназистар араһында һуңынан бер-береһе менән ғаилә ҡороусылар ҙа етерлек, шуға беҙ ҙә үҙебеҙгә киләштәр ҡарап йөрөйбөҙ. Сөнки бергә уҡығас, бер ерҙә йәшәгәс, интәштәреңдең холҡон, ҡылыҡтарын беләһең, етмәһә, ул да һинең менән бер үк ҡиммәттәр өлгөһөндә тәрбиәләнгән була бит инде.

**➔ Уҡыусы күңеле ниндәй уҡытыусыны яҡшыраҡ ҡабул итә? Һеҙҙеңсә, идеаль уҡытыусы ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш? Ә һеҙ белем алған гимназияла ундайҙар бармы?**

**Мөхәмәт:** Минең уйымса, уҡытыусыларҙы бер ҡасан да айырып ҡарарға ярамай, беҙ уларҙың һәр береһен ихтирам итәбеҙ. Уларҙың һәр береһе әҙерәк кенә сәйер, үҙенсә ҡыҙыҡ һәм һәр береһен үҙенсә яратабыҙ.

**Гөлшат:** Баланы аңлай белеү һәм бала күңелле булыу - ысын уҡытыусыға хас тәүге сифаттарҙыр. Шулай уҡ уның белеме һәм мәғлүмәтле булыуы, белгәнен, тормош тәжрибәһен уҡыусыларға еткерә алыуы мөһим. Беҙҙең гимназияла бөтөн уҡытыусылар ҙа тап ошо сифаттарға эйә, тимәк, уларҙы идеаль уҡытыусы тип атарға була. Ундайҙарҙы, ғәҙәттә, булмышы менән уҡытыусы, тип йөрөтәләр.

**Гәлиә:** Мин ысын уҡытыусы Гөлсәсәк Салауат ҡыҙы Ҡылысова кеүек булалыр, тип иҫәпләйем. Ул гимназияла башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен алып бара. Уның дәрестәре шул тиклем ҡыҙыҡ, хатта ваҡыттың үткәне лә һиҙелмәй.

**Айназ:** Улайға китһә, беҙҙең гимназияла һәр уҡытыусы шулай. Быны рус әҙәбиәте уҡытыусыһын алып ҡарайыҡ, йәки шул уҡ физика, математика фәнен иҫкә төшөрәйек - һәр уҡытыусы үҙ фәне аша һиңә был ябай булмаған тормошта нисек итеп дөрөҫ йәшәргә өйрәтә, һабаҡ бирә.

**Айгүзәл:** Атай-әсәйҙән ситтә йәшәгәс, төрлө сетерекле һорауҙар менән тәүҙә социаль педагог Рима Фәйез ҡыҙы Нәбиеваға мөрәжәғәт итәбеҙ. Ҡайһы саҡта ниндәйҙер эшең килеп сыҡмай ҙа ҡуя, ә уның менән кәңәшләшкәс, барыһы ла "һә" тигәнсә хәл ителә. Ул алып барған "Таңсулпан" балалар театры - үҙе тәрбиә мәктәбе.

**Гәлиә:** Был һорауға яуап биргәндә тағы бер ысын мәғәнәһендәге уҡытыусины, тәрбиәсене атап китмәһәң, хилаф булыр ине. Ғәҙәттә, уҡыусылар мәктәп директорынан бер аҙ шөрләйҙәр. Ул бит етәксе, шулай булырға тейеш тә. Әммә беҙҙең директорыбыҙ Әлфир Сулпан улына ҡарата бындай тойғо юҡтыр ул беҙҙең уҡыусыларҙа, уны уҡытыусы һәм директор булараҡ, барыһы ла ихтирам итә, дуҫ була белгәне өсөн ярата. Гимназияла уҡыусы балаларҙың һаны ете йөҙ, ә Әлфир Сулпан улы уларҙың һәр береһен йөҙгә таный һәм исемләп белә. Ҡыҙҙарҙың таҫмаһы ҡыйыш бәйләнгәнме, егеттәрҙең галстугын төҙәтергә кәрәкме, ул исемләп мөрәжәғәт итеп, бер юлы хәлендә лә һорашып китә.

**➔ Әңгәмәбеҙ аҙағында хыялдар тураһында ла һөйләшеп алайыҡ. Ғәҙәттә, хыялдар кумирҙар өлгөһөндә тыуыусан. Һеҙ кемгә оҡшарға тырышаһығыҙ?**

**Айназ:** Йәш кешенең кумирҙары бер нисәү булырға тейештер ул. Һин барыбер бер генә кеше һымаҡ була алмайһың. Шуға, бер нисә кешенең айырым сифаттарын туплап, уларҙан да яҡшыраҡ булырға тырышырға кәрәк.

**Айгүзәл:** Әйткәндәй, мин үҙем шулай итәм: бер уҡытыусынан - бер сифат, икенсеһенән икенсе матур сифат күсереп алам. Айырым ғына кумирым юҡ. Бар уңышлы кешеләрҙең уңыш сере - кемгәлер оҡшарға тырышмау, тип уҡығайным. Сөнки һин бер кешегә генә табынаһың икән, теләйһенме, юҡмы, үҙеңде сикләйһең булып сыға.

**Гөлшат:** Гимназияның һәр сығарылыш уҡыусыһы менән ғорурланырға, уға оҡшарға тырышырға булыр ине. Беҙҙә, мәҫәлән, Рәми Ғарипов кеүек телһөйәр булырға һәр кем ынтыла.

**Мөхәмәт:** Интернат миңә яңы хыялдар бүләк итте, фекерләүем тулыһынса үҙгәрҙе. Киләсәктә минең иҡтисадсы булырға пландарым бар, ә гимназияла алған белемем быны тормошҡа ашырырға ярҙам итә. Ә кумир булырҙай кеше күп ул, тик шул уҡ ваҡытта һәр кешенең үҙ тормошо үҙенсәлекле, ҡыҙыҡлы икәнен дә онотмайыҡ. Беҙҙең һәр беребеҙ республикабыҙ өсөн файҙалы кеше булырға теләй - бөгөн төп маҡсатыбыҙ ҙа, хыялыбыҙ ҙа ошо.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Әгәр ҙә дәүләттәр беҙҙең гимназия-интернат моделе буйынса үҫешһә, илебеҙ ҡалай көслө булыр ине", - тигәйне йәштәр әңгәмәбеҙ ваҡытында. Бының өсөн, улар әйтеүенсә, аҡыллы етәксе һәм үҙ-ара дуҫ булыу ғына ла етә. Әле саҡ оло тормошҡа аяҡ баҫырға торһалар ҙа, ҡыйыу фекерләйҙәр, уны ҡыҫҡырып әйтергә тартынмайҙар. К. Маркс әйтмешләй, һәр йәш кеше йәмғиәттә нығынған ҡиммәттәрҙе шик аҫтына алырға, ныҡлыҡҡа һынарға, яңы шарттарға яраҡлырын тикшереп ҡарарға ла тейеш. Һәр хәлдә, Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернат кеүек уникаль уҡыу йорто әҙерләгән уҡыусыларҙың тормошобоҙҙо яҡшы яҡҡа үҙгәртер, үҙ эше менән дә, фекере менән дә республикабыҙҙың сәскә атыуына булышлыҡ итер шәп белгестәр буласағына шик юҡ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

---

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Һунарсылыҡтың иң ябай ысулы булып ҡырағай көҙәләрҙе ҡар шекәрәһе буйлап эҙәрлекләү торған. Яҙғыһын, көндәр йылытып, ҡар епшекләнгәс һәм уның артынса уҡ килгән һалҡындар һөҙөмтәһендә ҡар өҫтөндә боҙло ҡатлам барлыҡҡа килгән һәм ул көҙәләргә тиҙ йүгерергә ҡамасаулаған. Шул ваҡытта башҡорттар уларҙы эҙәрләкләп килеп тотҡан. Ҡайһы берҙә мышыларҙы ла шулай аулағандар. Уларҙы инде саңғы менән эҙәрлекләгәндәр. Бындай яҙмышҡа төлкөләр, бүреләр, хатта һеләүһендәр ҙә дусар булған.

Йәнлек эҙен тапҡас, ике һунарсы уның артынан бер нисә сәғәт дауамында хайуанды арыҡтансы саңғы менән эҙәрлекләгән. Йәнлек арып йығылғас, алдан килгән һунарсы уны суҡмар йәки балта төйәҙһе менән башына һуғып үлтергән. Бындай һунарҙа һунарсылар икәү йәки өсәү булған. Икеүһе хайуанды эҙәрлекләгән, ә арттағы өсөнсөһө йылы өҫ кейемен, аҙыҡ-түлекте күтәреп йөрөгән.

Йәнлектәрҙе төрлө тоҙаҡ ярҙамында аулау ысулдары йышыраҡ осраған һәм күп төрлө булған. Иң ябайы булып бүре аулау өсөн ҡаҙылған соҡорҙар торған. Уларҙы көҙөн, диаметры ике метр, тәрәнлеге 3 метр булған түңәрәк рәүешендә ҡаҙығандар. Уртаһына һайғау ҡағып ҡалдырғандар. Уның үрге осо соҡор ситенән саҡ ҡына бейегерәк булып, сығып торған. Соҡор өҫтө ҡоро-һары, сыбыҡ-сабыҡ менән ҡапланған, ҡар йәки һалам менән күмелгән. Әйткәндәй, башҡорттар ҡапҡан сифатында соҡорҙарҙы һирәк файҙаланған, уларҙа төрлө тоҡандар, элмәктәр (тоҙаҡ) сағыштырмаса киң таралған.

Ҡуян тоҙағы, төлкө тоҙағы кеүек үк, ат ялынан үрелгән. Һуңыраҡ уларҙы нәҙек тимерсыбыҡтан үрә башлағандар. Бындай бер нисә тиҫтә тоҙаҡ ҡуян йәки төлкө һуҡмағына ҡуйылған. Һуҡмаҡ өҫтөнә ҙур булмаған ҡыуаҡ эйелтелгән, уның осона элмәктең бер осо бәйләп ҡуйылған. Ағас махсус ҡулайлама ярҙамында шулай эйелтелгән килеш ҡалдырылған. Элмәк иһә һуҡмаҡтан килгән йәнлек уға башы менән инерлек итеп ҡуйылған. Ҡуян йәки төлкө башын элмәккә тығыу менән ҡулайлама ысҡынған һәм ағас турайып, йәнлекте өҫкә күтәргән. Ҡайһы бер осраҡта элмәктең осо нәҙек һайғау осона бәйләнгән. Ул үҙ сиратында һуҡмаҡҡа яҡын үҫкән ағасҡа нығытылған. Уның аҫҡы осона, йәнлек башын элмәккә тығыу менән, ағас турайған кеүек һайғау ҙа күтәрелһен өсөн ауыр нәмә нығытылған. Төлкө тоҙағында өҫтәмә рәүештә ағас ҡалып та кейҙерелгән. Ул башын элмәккә тыҡҡан төлкөнөң муйынын ҡыҫып, уға элмәкте сәйнәп өҙөү мөмкинлеген бирмәгән.

Һунарсылар һәр көн тоҙаҡтарҙы тикшереп торған, табыш булһа, уларҙы алып, яңы тоҙаҡ ҡорғандар. Был ысул, нигеҙҙә, көҙөн ҡулланылған. Башҡорттар тоҙаҡ менән бик һирәк кенә көҙән, йомрандарҙы ла аулаған.

**(Дауамы бар).**

***✓ Кинәт кенә көтөлмәгән дефолт йә берәй донъя иҡтисади, финанс көрсөгө килеп сыҡһын, ул аҡсалар ҡапыл юҡҡа сығып, макулатура сифатын да алырға мөмкиндәр.***

# Унар ғына һумлыҡ, Һалдыр, егет,

**Һүҙлектәрҙә һәм википедияларҙа аҡсаға шундай аңлатма бирелә: аҡса - башҡа тауарҙар һәм хеҙмәттәр хаҡының универсаль эквиваленты булған үҙенсәлекле тауар. Аҡсаға тауар тип ҡарау логикаға һыйып бөтмәһә лә, кешелек тарихында тәүге аҡсалар барлыҡҡа килгәнгә тиклем фәҡәт айырым тауарҙарҙың, әйтәйек, далала йәшәгән халыҡтарҙа малдың, йәнлек тиреләренең (Океания утрауҙарында, Көньяҡ Америкала - ҡабырсаҡтар һәм ынйыташтар, Яңы Зеландияла - уртаһы тишек йәйташтар, Рәсәйҙә - тоҙ, тимер киҫәктәре һ.б.) ошо ролде башҡарып йөрөүен иҫкә төшөрһәк, барыһы ла үҙ урынына ултыра кеүек. Аҡса тарихына ҡараш ташлаһаң, тәүге тимер аҡсаларҙың ҙур массалы, ауыр булыуҙары билдәле. Ундай аҡсалар бойҙай ауырлығына ҡарап йөрөгән. Әйтәйек, кем берәү бер бот бойҙай һатып алам тиһә, сауҙагәргә шунсама ауырлыҡтағы тимер аҡса бирергә тейеш булған. Бөгөн беҙҙең телдә йөрөгән ауырлыҡ дәүмәле һаналған "бот" бына ҡасан барлыҡҡа килгән. Ошо нигеҙҙә төрлө халыҡтарҙың мина, сикль, лира, фунт исемле аҡса берәмектәре формалашҡан. Артабан ундай ауырлыҡтағы тимер киҫәктәрен күтәреп йөрөү ҙур ҡыйынлыҡ тыуҙыра башлағас, баҡыр, көмөш, алтын тәңкәләр һуға башлағандар. Әйткәндәй, урыҫ телендәге "деньги" һүҙе "тәңкә"нән килеп сыҡҡан. Тәүге ҡағыҙ аҡсалар 910 йылда Ҡытайҙа барлыҡҡа килгән. Рәсәйҙә иһә бары тик 1796 йылда тәүге ҡағыҙ аҡсалар әйләнешкә ингән. Ҡағыҙ аҡсалар барлыҡҡа килеүе тарихы шулай уҡ ҡыҙыҡлы. Улар иң тәүҙә банкҡа тапшырылған ҡиммәтле таштарҙың квитанцияһы, сертификаты рәүешендә йөрөгән, аҙаҡ иһә, ҡағыҙ аҡсаға әүерелгән. Аҡса тарихына бәйле тағы ла бик күп факттар килтерергә мөмкин булыр ине. Әммә хәҙерге заман күҙлегенән нимә һуң ул аҡса? Элек халҡыбыҙҙа аҡсаға ҡарата ниндәй мөнәсәбәт булған? Ни өсөн беҙҙең ата-олатайҙар аҡсаны урап үтергә тырышҡан? Хужалыҡ итеүҙең иҡтисадтан өҫтөнлөгө нимәгә ҡайтып ҡала? Ни өсөн беҙ бөгөн аҡсаға ҡарата үҙебеҙҙең мөнәсәбәтте ҡырҡа үҙгәртергә бурыслыбыҙ? Финанс инструменттарын өйрәнеү нимәне аңлата? Аҡса эшләүҙең заманса юлдары нимәнән ғибәрәт? Беҙгә өс иҡтисад моделенең ҡайһыһы ҡулай?**

**Ошо һәм башҡа һорауҙарға күренекле ғалим, иҡтисад фәндәре докторы Ҡадир Барый улы МӘҒӘФҮРОВ яуап эҙләй.**



## Аҡса һанға һуғылмаған

Элек-электән халҡыбыҙҙа аҡсаға ҡарата үҙенсәлекле мөнәсәбәт һаҡланып килгән. Ҡыҫҡаһы, аҡса бигүк һанға һуғылмаған. Өләсәйҙәребеҙ, мәҫәлән, аҡсаны камзулға, ҡашмауға, һаҡалға, сәсбауға тәңкә итеп таға торған биҙәүес итеп кенә белгән. Ғөмүмән, иренә аҫаба хоҡуҡлы, малы далалар тулып утлап йөрөгән халыҡ аҡсаны мал йәғни байлыҡ итеп күрмәгән. Беҙҙә аҡса күберәген символик мәғәнәгә генә эйә булған, тип әйтергә мөмкиндер. Халҡыбыҙҙың күп кенә боронғо йырҙарында ла аҡсаның мал булмауы, матурлыҡ өсөн ҡулланылыуы хаҡында әйтелә. Мәҫәлән, киң билдәле "Абдрахман" йырының ике юлы:

*Унар ғына һумлыҡ, әй,*
*ун аҡыҡ,*
*Һалдыр, егет,*
*эйәрең ҡашына...*

Аҡса, ысынлап та, мал түгел, ул, әйткәнебеҙсә, символ ғына. Аҡса алыш-бирешитеүҙе еңелләштерә торған бер сара, ысул, ҡулланма. Байлыҡтың иң әһәмиәтлеһе хаҡында "Урал батыр" эпосында ла ишара яһала, ул да булһа - тәбиғәт. Тәбиғәткә тыуған һәм йәшәгән ер, һыу, һауа, тауҙар, далалар, үҫемлектәр, йәнлектәр, ҡоштар, балыҡтар донъяһы һ.б. инә. Тәбиғәт беҙҙә бөтөн халыҡ байлығы булып иҫәпләнгән. Уға һаҡсыл мөнәсәбәт кешегә сабый сағынан төрлө йолалар, тыйыуҙар рәүешендә лә һеңдерелгән.

Ә берәүҙеке аҙыраҡ, икенсенеке күберәк булған һәр кемдең байлығы - ул мал. Мал, ғөмүмән, далала көн күреүсе боронғо халыҡтар өсөн, хәҙергесә әйткәндә, янмай һәм семәй торған валюта ролен башҡарған. Әммә башҡорттар аҡсанан бөтөнләй азат булған тип әйтеү ҙә хәҡиҡәткә тура килеп үк бөтмәҫ ине. Яҡыныраҡ тарихҡа күҙ һалһаҡ, уларға аҡса сәй-шәкәр кеүек ваҡтөйәк һатып алыу өсөн генә кәрәк булған. Элек башҡорт бер атын егеп, икенсеһен етәкләп ҡалаға барған да, баҙарҙа атын кәрәкле әйбергә алмаштырып, сәй-шәкәрен, башҡаһын тейәп ҡайтҡан да киткән. Бынан нимә күренә? Башҡорттоң йәшәү рәүеше хәҙерге көн күҙлегенән иң әшәке яуызлыҡ сығанағы һаналған аҡсаны урап үтергә мөмкинлек биргән. Ғөмүмән, башҡорт ошо һәм башҡа юлдар менән һәр ваҡыт аҡсаны мөмкин тиклем урап үтергә, уға аҙыраҡ ҡағылырға тырышҡан. Баҙарға алып барған атын һатҡан осраҡта ла аҡсаһына шундуҡ әйбер алып бөтөргән, йәғни аҡса беҙҙең атай-олатайҙар ҡулында ваҡытлыса ғына торған, оҙаҡ һаҡланмаған.

Хәҙерге ваҡытта күп кенә байҙарҙың аҡсалары банктарҙа электрон тамғалы һандар рәүешендә генә ята. Ул - байлыҡ та, мал да түгел. Сөнки бөгөнгө аҡсалар хатта алтын менән дә тәьмин ителмәгән. Кинәт кенә көтөлмәгән дефолт йә берәй донъя иҡтисади, финанс көрсөгө килеп сыҡһын, ул аҡсалар ҡапыл юҡҡа сығып, макулатура сифатын да алырға мөмкиндәр.

Был хәл донъяның финанс донъяһында күсемһеҙ милек тигән төшөнсәне барлыҡҡа килтерҙе. Йәғни иҫәптәрендә самаһыҙ күп аҡсаһы булған мультибайҙар үҙҙәренә кәрәккән-кәрәкмәгән милек һатып алып, көрсөк килеп сыҡһа, шул милкен һатып, байлығын һаҡлап ҡалырға иҫәп тота.

## Хужалыҡ итеү ысулы

Боронғораҡ тарихты күҙаллаһаҡ, атай-олатайҙарыбыҙ элек-электән ил эсендәге һәм бөтә донъя баҙарҙарында ҡатнашып, аралашып, сауҙа итеп йәшәгән. Бөйөк Ебәк юлының көнсығыштан көнбайышҡа беҙҙең ер аша үтеүе лә күпте һөйләй. Ул саҡта доллар, евро кеүек хәҙерге халыҡ-ара валюталар юҡ саҡта, асылда, баҙарҙа әйберҙе натураль алыштырыу менән эш иткәндәр, йә булмаһа, алтын-көмөш, баҡыр кеүек ҡиммәтле аҫылташтар менән түләгәндәр. Шул саҡта беҙҙең ата-олатайҙар иһә баҙарға һатыуға сығарған әйберҙең үҙен алыш-биреш итеү берәмеге итеп йөрөткән. Әйтәйек, "тин"дең тейен тиреһенән, "һум"дың малдың һум итенән килеп сығыуы күп нәмә тураһында һөйләй.

Элек аҡсаға шундай мөнәсәбәт булһа ла, үкенескә күрә, хәҙер ҙә күбебеҙҙең аҡсаны эшкә һанамауы, шул арҡала алыпһатарлыҡ менән шөғөлләнеп бармауы яҡшы түгел. Әйткәндәй, был йәһәттән Башҡортостанда йәшәүсе башҡа милләт вәкилдәре лә "башҡортлашып" бөткән, улар ҙа алыпһатарлыҡҡа әллә ни маһир түгел. Федераль һәм республика әһәмиәтендәге юл буйҙарын ҡарағыҙ: башҡа яҡтар менән сағыштырғанда унда һатыу итеүселәр бик аҙ. Уларҙың булғандарының да күбеһе Урта Азия, Кавказ республикаларынан килеүселәр.

Хәҙерге заманда элекке кеүек тауарға тауар алыштырып йәғни бартер менән генә йәшәп булмай. Сөнки иҡтисад дүрт өлөштән тора:

1. Етештереү.
2. Бүлешеү.
3. Алышыу.
4. Ҡулланыу.

Иҡтисадта ошоларҙың барыһы ла кәрәк, әгәр ҙә уларҙың береһе генә булмаһа, иҡтисад йәшәй алмай. Иҡтисадтан тыш, хужалыҡ тигән төшөнсә бар. Мәҫәлән, ауыл хужалығы. Хужалыҡ итеү иҡтисадтан бер башҡа юғары тора. Ни өсөн? Бына ауыл хужалығы миҫалын ғына ҡарайыҡ. Ауыл хужалығында эшләүсе кеше хужалыҡ иткән саҡта үҙенең ресурстары тураһында ҡайғырта. Ерҙең уңышын арттырырға, малының һанын күбәйтергә, продуктлылығын күтәрергә тырыша. Ә иҡтисадҡа килгәндә инде, бында мәсьәлә бөтөнләй башҡаса. Әйтәйек, нефть табыусылар ер аҫтынан нефтте һурып алалар ҙа, уның урынына тоҙло һыуҙы тултыра ла ҡуялар. Йәғни нефтсене ер аҫтында барлыҡҡа килгән бындай бушлыҡ менән ни булыры бөтөнләй ҡыҙыҡһындырмай. Әйтәйек, шахтерҙар беҙҙең Миндәк, Яйыҡ йылғалары буйын ҡаҙып, күмерен алып бөтөрҙөләр ҙә, ул ерҙәргә ҡул һелтәнеләр. Ни өсөн Күмертау районын Көйөргәҙегә үҙгәрттеләр? Сөнки уның башта ғүмерлек тойолған күмере бөттө, ҙур майҙандағы ерҙе аҡтарып ташланылар ҙа оноттолар. Сибай, Учалы карьерҙары менән дә шундай уҡ хәл күҙәтелә. Өңөрәйеп буш ятҡан карьер соҡорҙарына ҡараһаҡ, ытырғаныу тойғоһо кисерәһең.

***Ә иҡтисадҡа килгәндә инде, бында мәсьәлә бөтөнләй башҡаса. Әйтәйек, нефть табыусылар ер аҫтынан нефтте һурып алалар ҙа, уның урынына тоҙло һыуҙы тултыра ла ҡуялар. Йәғни нефтсене ер аҫтында барлыҡҡа килгән бындай бушлыҡ менән ни булыры бөтөнләй ҡыҙыҡһындырмай. Әйтәйек, шахтерҙар беҙҙең Миндәк, Яйыҡ йылғалары буйын ҡаҙып, күмерен алып бөтөрҙөләр ҙә, ул ерҙәргә ҡул һелтәнеләр. Ни өсөн Күмертау районын Көйөргәҙегә үҙгәрттеләр? Сөнки уның башта ғүмерлек тойолған күмере бөттө, ҙур майҙандағы ерҙе аҡтарып ташланылар ҙа оноттолар. Сибай, Учалы карьерҙары менән дә шундай уҡ хәл күҙәтелә. Өңөрәйеп буш ятҡан карьер соҡорҙарына ҡараһаҡ, ытырғаныу тойғоһо кисерәһең.***

Быларҙы ни өсөн һөйләйем һуң? Башҡорт борон-борондан хужалыҡ менән шөғөлләнгән. Хужалыҡ итеү иҡтисадтан күпкә юғары тора. Халҡыбыҙ элек-электән тәбиғәткә бик һаҡсыл ҡараған. Хатта кәрәкмәгән урынға бағана ултыртыу ҙа тыйылған элек. Хәҙер өйҙө һалған саҡта ерҙе ҡаҙып, унда таш тултырып, шуның өҫтөнә нигеҙ ҡоралар. Элек иһә, ерҙе ҡаҙмайынса ғына өҫтөнә ҡарағас бүкәндәр ултыртып, йортто шуның өҫтөнә күтәргәндәр. Ә тирмәгә килгәндә инде, үҙегеҙ беләһегеҙ, донъяла унан да экологик яҡтан таҙа, ер ҡыртышына зыянһыҙ ҡоролма юҡ. Әйткәндәй, ҡайһы бер әтрәгәләмдәр, борон башҡорт тирмәлә йәшәгән, тип кәмһетергә тырыша. Әйҙә, бөгөн иҫәпләп ҡарайыҡ, тирмә арзанмы, әллә берәй землянкамы, алты мөйөшлө өймө?

Шулай итеп, башҡорттоң көнитмеше хужалыҡ итеүгә ҡоролған. Хужалыҡ һүҙенең нигеҙендә "хужа" тамыры ята.

✓ ***Беҙ үҙебеҙ етештергәнгә өләшләтә генә хужабыҙ. Беҙ етештерергә маһир булһаҡ та, баҙар, финанс механизмдарын белмәүебеҙ арҡаһында үҙ тауарыбыҙҙы һатыу хоҡуғына эйә түгелбеҙ.***

# Әй, ун аҡыҡ, эйәрең ҡашына

Хужа кеше бер ваҡытта ла донъяһын емерергә, ҡыйратырға тырышмай. Уны ҡурсалай, тәҙәклөгән, киләсәген ҡайғырта. Кешелектең киләсәге иҡтисадсылар түгел, ә хужалыҡ итеүселәр ҡулында. Ер аҫты байлыҡтары ла мәңгелек түгел, ятҡылыҡтар, уҙа барһа, йөҙ- йөҙ илле йылға етер. Шул саҡта инде кешелек тағы ла хужалыҡ итеүселәргә ҡараясаҡ. Сөнки ерҙең ашлыҡ, иген, йәшелсә-емеш үҫә торған өсҡө өләшә заман ахырына саҡлы, йәғни кешелектең ғүмеренә етерлек.

## Эште ликбездан башларға

Сиам игеҙәктәре әйтмешләй, властың ике факторы бар: уларҙың береһе - алтын, икенсеһе - матбуғат. Тимәк, донъяла ниндәй генә финанс көрсөктәре булһа ла, алтыны булған һәм мәғлүмәт таратыу рыҫағтарын үҙ ҡулында тотҡан кеше, власть үҙен һаҡлап ҡала ала, тигән һүҙ. Элекке менталитет хәҙерге заман талаптарына яуап бирмәү сәбәпле, беҙ ҡайһы бер йәһәттән артта ла ҡалабыҙ шикелле. Ни өсөн тигәндә, бөгөн бар донъя финанс инструменттарын үҙләштереп, шуның менән йәшәй. Әгәр ҙә башҡорт милләте финанс инструменттарын үҙләштермәй, элеккесә бары тик хужалыҡ итеү, етештереү ысулы менән генә булһа, ул башҡа халыҡтарҙы туйындырыу менән генә мәшғүл буласаҡ.

Был хәлдә нисек итеп үҙгәртергә була һуң? Беҙ хатта кредит төшөнсәһен дә ныҡлап үҙләштереп бөтмәгәнбеҙ. Алыпһатарлыҡҡа ла беҙ әйҙәрҙе осһоҙға алып, ҡиммәткә һатыу итеп ябайлаштырып ҡарайбыҙ. Был эштең дә нескәлектәре бик күп. Ә беҙгә барыһын да өйрәнергә, барыһын да белергә кәрәк. Ә бының өсөн ни эшләргә? Юлы берәү генә: халыҡ араһында ликбез башларға кәрәк. Финанс инструменттарын өйрәнмәһәк, беҙгә киләсәктә бик ауыр буласаҡ. Әле бөтә донъялағы иҡтисад финанс ҡоролмаһына ҡоролған. Берәүҙәр етештерә, икенселәр уларҙың етештергәненә хужа. Туранан-тура хужа түгел. Әйтәйек, ауылда берәү мал үҫтерә. Ул үҙ малына формаль рәүештә үҙе хужа. Үҫтереүсенең алыпһатарлыҡҡа бармыы булмаһа, уның ауылында ошондай эштәр менән шөғөлләнә алырлыҡ әүҙем кешеләр булмағанлыҡтан, хужа үҫтергән малын ярты хаҡҡа йәки унан да кәмерәккә биреп ебәрергә мәжбүр була. Нимә килеп сыға? Беҙ үҙебеҙ етештергәнгә өләшләтә генә хужабыҙ. Беҙ етештерергә маһир булһаҡ та, баҙар, финанс механизмдарын белмәүебеҙ арҡаһында үҙ тауарыбыҙҙы һатыу хоҡуғына эйә түгелбеҙ.

## Аҡса эшләүҙең заманса юлы

Хәҙерге заманда төрлө биржаларҙа долларҙың йә евроның хаҡы күтәрелеүен йә төшөүен файҙаланып аҡса эшләүселәр бар. Көнбайыштан, башлыса, Американан беҙҙең илгә килгән аҡса эшләүҙең был формаһында харамлыҡ бар барлыҡҡа. Ғөмүмән, табыш алған бар эштә лә харамлыҡ барҙыр тип уйлайым. Сөнки харамлыҡ булмаһа, табыш та булмай һәм барлыҡ ойошмалар ҙа бер үк көндә хәйриә ойошмаларына әйләнеп бөтөрҙәр ине. Үҙенең мәнфәғәтен ҡайғыртмаған ойошма хәҙерге шарттарҙа йәшәй ҙа алмай. Шул уҡ хәйриә ойошмаларында эшләүселәр ҙа хәйриә иҫәбенә килгән аҡсаға йәшәй һәм улар үҙҙәренең эш хаҡын күтәреү өсөн әүҙемерәк тәләпселәрҙер мәжбүр.

Беҙ хәләл көс менән, тир түгеп мал табып өйрәнгәнбеҙ. Шуға күрә лә аҡса эшләүҙең ошондай заманса юлдарынан алыҫыраҡ торорға тырышабыҙ. Әммә был ҙур хата, сөнки биржа, инвестиция юлы менән аҡса эшләүҙе беҙ уйлап сығармаған, ул - замана талабы. Икенсенән, беҙ ошо юл менән аҡса эшләргәндә кемдеңдер өләшөнә инмәйбеҙ, кемдеңдер ауыҙынан тартып алмайбыҙ, бары тик үҙебеҙҙең белемде, зирәклекте, алдан күрә белеүсәнлекте эшкә егеп, аҡса эшләйбеҙ генә.

***Беҙгә, башҡорттарға Япония моделе яҡын, ана шул өсөнсә япон моделен алға һөрөргә ине. Ни өсөн тигәндә һәр бер башҡортҡа иң беренсе нәүбәттә патриотлыҡ тойғоһо хас. Рәсәй халыҡтары араһында "Илем, ерем, Уралым", тип йәшәгән халыҡ берәү генә бит ул. Башҡорт халҡының менталитеты патриотлыҡты иң беренсе урынға ҡуя. Татарҙар иһә, еңел күтәрелә, урыҫтар иһә "Мой адрес не дом и не улица, мой адрес - Советский Союз" тип йырлай. Нисәмә быуат буйына башҡорттарҙан патриотлыҡ тойғоһон алып ташларға тырыштылар, әммә ул быны юғалтманы. Шулай уҡ Швеция һәм Америка моделдәренең дә айырым элементтарын үҙләштереү ҡулайлы булыр ине.***

Акция менән эш итеүсе биржаларҙа ике төрлө контингент бар. Уларҙың тәүгеһе инвестор, йәғни аҡсаһын һалыусы, икенселәре - уйынсылар. Уйынсылар котировкаларҙың бер төшөүен, бер күтәрелеүен көтөп, биржала көндәр буйына мәж килеп ултыра. Улар - алыпһатарҙар, йәғни спекулянттар. Уларҙың 5 кенә проценты ота, 95 проценты аҡсаһын оттора. Ә инде инвесторҙар брокерҙар аша үҙҙәренең аҡсаһын ниндәйҙер эшкә һалып, шуның артыуынан үҙенә табыш алыусылар. Аҡсаһын ҡысмәүсе милеккә һалыусы инвесторҙар шулай уҡ ота, сөнки завод-фабрикаларҙың, биналарҙың хаҡы көндән-көн арта ғына бара. Ниндәйҙер даими эшләүсе предприятие акцияларына һалыу инвестиция тип атала. Был аҡсаны һаҡлау ғына түгел, ә арттырыу юлы.

Биржала аҡса эшләү юлы менең өсөн шул тиклем таныш проблема. Мин үҙем был инструментты мотлаҡ өйрәнергә тейешмен, тип иҫәпләнем һәм 2009 йылдың февраленән башлап ошо эш менән шөғөлләнәм. Ул ваҡытта Һаҡлыҡ банкының акциялары 8-13 һум тора ине, бөгөн улар - 80-100 һумға тиклем күтәрелде. Әгәр ҙә мин быны алдан белгән булһам һәм акцияларымды "Газпром"ға түгел, шул банкҡа алып барған булһам, бөгөн арыу ғына процентҡа эйә булыр инем. Һөҙөмтәлә бик күп аҡсамды юғалттым, әммә ләкин бик күп нәмәгә өйрәндем. Әммә ләкин һаман да мотлаҡ юлдарын ныҡлап өйрәнеп бөтмәгәнмен. Америкала халыҡтың 30, ә Японияла халыҡтың 70 проценты ошондай биржалар эшмәкәрлегендә ҡатнашып, үҙенең йәшәү сығанағын тәьмин итә. Барыбер ҙә хәҙерге заман финанс инструментын өйрәнмәйенсә булмай. Был тәңгәлдә лә беҙҙең халыҡҡа әле ликбез үткәрергә кәрәк. Әгәр ҙә үткән быуаттың 90-сы йылдары кире килһә, мин хосусилаштырыу талондарының әһәмиәтен бар тулылығында аңлап, башҡаларҙың да талондарын арзан ғына хаҡҡа осороуға мөмкин тиклем аҙыраҡ юл ҡуйыр инем.

## Иҡтисадтың өс моделе

Ҡағыҙ эшенә бәйле ваҡсыллыҡты, кем менәндер оҙайлы суд аша мөнәсәбәттә булыуҙы беҙҙең халыҡ вәкилдәре өнәп бөтмәй, ене кеүек күрә. Был бик мөһим психологик момент һәм тап ошондай ҡатмарлыҡтар арҡаһында ла күп кенә эшлекле кешеләребеҙ үҙенең эшен асып, үҙаллы эшмәкәрлек итеү урынына, кемгәлер ялланып эшләүҙе хуп күрә. Мәҫәлән, ҡайһы бер милләттәр ҡырҡтартмасылыҡ эшен яратып башҡара. Уның эше ваҡ, тинен тингә ҡушып һанауҙы, үтә нескә булыуҙы талап итә был шөғөл. Бында булһа - бүрелей, булмаһа - сүрелей, тигән принцип менән эшләп булмай. Ә башҡорт уның кеүек эште эшкә лә һанамай. Был тарихтан килә, сөнки өйөр-өйөр йылҡыны, көтөү-көтөү һыйыры йә һарығы булған кеше өсөн тин һанау, ысынлап та, ваҡланыу булып тойолғандыр. Башҡорт тинен генә түгел, малын да һанамаған, үҙәк, ятыу йә кәртә тулы булһа ла, малы ла теүәл булып күренгән.

Әммә беҙгә хәҙер үҙгәрергә тура киләсәк. Сөнки донъя хәҙер баҙар режимына күсте. Теләйбеҙме-юҡмы, беҙ был режимды ҡабул итергә һәм үҙләштерергә бурыслы. Әлбиттә, бер быуын алмашынып, тормош аренаһына йәштәр килмәйенсә тороп, был хәлдәр тиҙ генә үҙгәреп китмәйәсәк. Әле үткән быуаттың 90-сы йылдарында донъяға килгән йәштәр үҫеп етеп килә. Бына шул йәштәр быны тормошҡа ашыра алаcаҡ. Хәҙер беҙгә элек башҡорт халҡы өсөн оят, мәсхәрә булып күренгән ысулдарҙы үҙләштерә башлау мөҙҙәте килеп етте. Башҡаса бер нәмә лә эшләп булмаясаҡ.

Мине һәр ваҡыт япон халҡы һоҡландыра. Улар боронғо менталитетын да ташламай, шул уҡ ваҡытта замандың иң кәрәкле сифаттарын да үҙләштерә. Улар беҙҙең кеүек үк боронғо милләт булһа ла, заманса ла йәшәй ала. Хикмәт нимәлә?

Бөгөн баҙар иҡтисадының донъяла төп өс моделе бар. Америка моделе, Швеция моделе һәм Япония моделе. Америка моделе индивидуализмға ҡоролған, унда һәр кемгә уңышҡа өлгәшеү мөмкинлеге бирелә һәм халыҡтың иң түбән ҡатламында ҡалғандарына ғына маҡсатҡа ярашлы ярҙам күрһәтелә. Унда ил байлығын ғәҙел итеп бүлешеү тигән төшөнсә бөтөнләй юҡ. Швеция моделендә иң беренсе урында социаль ғәҙеллек төшөнсәһе тора. Ундағы закондар байҙар иҫәбенә хәлһеҙҙәргә ярҙам итеүҙе тормошҡа ашыра. Япония моделендә иһә, элек бер йырҙа әйтелгәнсә, иң тәүҙә тыуған илең, аҙаҡ ҡына үҙең хаҡында ҡайғыртыу беренсе урынға ҡуйылған. Бөгөн һәр бер япон иң тәүҙә Япония тураһында уйлай, шунан һуң ғына үҙен иҫенә төшөрә. Йәғни һәр бер япондың көнкүреше дәүләттең көнкүрешенә бәйләнгән.

Беҙгә, башҡорттарға Япония моделе яҡын, ана шул өсөнсә япон моделен алға һөрөргә ине. Ни өсөн тигәндә һәр бер башҡортҡа иң беренсе нәүбәттә патриотлыҡ тойғоһо хас. Рәсәй халыҡтары араһында "Илем, ерем, Уралым", тип йәшәгән халыҡ берәү генә бит ул. Башҡорт халҡының менталитеты патриотлыҡты иң беренсе урынға ҡуя. Татарҙар иһә, енел күтәрелә, урыҫтар иһә "Мой адрес не дом и не улица, мой адрес - Советский Союз" тип йырлай. Нисәмә быуат буйына башҡорттарҙан патриотлыҡ тойғоһон алып ташларға тырыштылар, әммә ул быны юғалтманы. Шулай уҡ Швеция һәм Америка моделдәренең дә айырым элементтарын үҙләштереү ҡулайлы булыр ине.

## Инициатива - халыҡтан

Бөгөн беҙгә милләттең йәшәүҙ кимәлен яҡшыртыр өсөн дәүләттән, хөкүмәттән был тәңгәлдә алып барған сәйәсәтенә йоғонто яһарлыҡ механизмдар уйлап сығарыу фарыз. Юғиһә, беҙҙә һәр нәмәне юғарынан күрһәтмә менән эшләп өйрәнгәндәр. Ә юғарынан күрһәтмә менән башҡарылған гәмәл, сәйәсәт, әгәр ҙә халыҡтың менталитетына тура килмәһә, ул хатта программа рәүешендә ҡабул ителгән йөҙ тапҡыр дөрөҫ сәйәсәт булған осраҡта ла килеп сыҡмай. Инициатива халыҡтың үҙенән сығыуы мотлаҡ. Ни өсөн тигәндә, әйтәйек, меңәр йылдар һуҙымында ошо ерҙә төйәк иткән халыҡ фәҡәт үҙенең нисек теләһә, шулай йәшәүе һөҙөмтәһендә генә хәҙерге көнгә килеп етә алған. Ул хәҙерге көнгә килеп етә алған икән, тимәк, уның юлы дөрөҫ булып сыҡҡан. Халыҡ бөгөн үҙ яҙмышын үҙе хәл итергә тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Аҡса хаҡында шундай әйтем дә бар: аҡсаның күбе лә бөтә, аҙы ла етә." Аҡса ни тиклем күп булмаһын, уны бер ай, уҙа барһа, бер йыл ҡулланырға була, ул барыбер бөтә, ә белемең, тәжрибәң ғүмерлек. Белем, тәжрибә артҡан һайын, уның мөмкинлеге лә арта, күбәйә бара", тигәйне "Ететау" торба үткәргестәрҙе таҙартыу һәм диагностикалау үҙәге директоры Ҡадурий Фазлетдинов ("Етегәндәй "Ететау, киләсәккә илтер тау..." 2012, 49-сы һан"). Быларҙан нимә аңлашыла: ысынлап та, беҙгә аҡса байлыҡ туплау, бай бай булыуҙы күрһәтеү өсөн түгел, үҙ еребеҙҙә лайыҡлы йәшәү, үҙ эшебеҙҙә булдырыу өсөн кәрәк. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ яҙып алды.**

✓ *Бына мин бер әбейҙе беләм. Ул күптән инде үҙҙәре олатай-өләсәй булып бөткән балаларына ла "Бәпәйем", "Балам", "Улғынам", "Ҡыҙым" тип өндәшә. Күптәр уға көлөп ҡарай, ә өлгө алырға кәрәклеген уйламай ҙа.*



*КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ*

**"Киске Өфө" гәзитендә (2013 йыл, 2-се һан) Күгәрсен районынан уйландырырлыҡ, хупларлыҡ һәм берҙәм күтәреп алырлыҡ фәһемле мәҡәлә баҫылды. Уҡытыусы Фәһимә Ситдиҡованың "Күренекле шәхестәрҙең тыуған йылы ғына була" тигән мәҡәләһе ул. Ятраткан яҙыусыбыҙ Зәйнәб Биишева менән уның тыуған яҡтарында бер нисә тапҡыр булырға тура килде. Әҙибәнең мине үҙе менән алыуының төп маҡсаты - тыуған ауылының аяныслы яҙмышын (Туйымбәт ауылына "киләсәкһеҙ" тигән мөһөр һалынғайны) хәл итеүҙә, журналист булараҡ, һүҙ әйтеү һәм әгәр ауыл яҙмышы ыңғай хәл ителһә, тыуған яғында йәй көндәре йәшәп торорлоҡ йорт-ҡура булдырып, тора-бара йорт-музей итеп үҙгәртеп ебәреү ине. Ошо уңай менән миңә Мәскәүҙән яҙған бер-нисә хатын тәҡдим итәм.**

# ЗӘЙНӘБ АПАЙ ҺҮҘЕ



**"Ҡәҙерле Мәрйәм һылыу!** Кисә һинең менән телефондан һөйләшкәндән үҙемдең йәшәү мөмкинлектәрем хаҡында, эштәремдең күплеген, ғүмерҙең ҡыҫҡалығын етди баһалау хаҡында ныҡ ҡына уйланғандан һуң, шундай бер фекергә килдем: минең өсөн Туйымбәттә лә, Исемдә лә өй һалдырып тороуҙың кәрәге булмаҫ. Унда ҡайтып йәшәп торор сағым күптән уҙған бит инде. Ваҡытым да, һаулығым да рөхсәт итмәҫ. Дөрөҫ, минең ғүмерем шунда йәшәгән халыҡты данлау, шул ерҙәрҙең сәскә атҡанын, заповедник булырҙай тәбиғәтенең һаҡланыуын күреп ҡыуаныу тигән оло бер маҡсатҡа төбәлеп уҙҙы. Хатта бер кемгә әйтмәһәм дә, бер саҡ ҙур яҙыусы булырмын да, экономик мөмкинлектәрем булыр ҙа, үҙ ауылымды ғына түгел, үҙ яғымдың матур тәбиғәтен, халҡының тормошон тағы ла матурлауҙа яҡындан ҡатнашырмын, тигән оло маҡсат менән янып йәшәнем, шул маҡсатыма ярашлы ижади емештәр бирергә тырыштым. Әммә йәшлек хыялдары - бер, ә мөмкинлектәр - икенсе... Хәҙер инде бөтәһенә лә һуң. Таяныстыҙ кеше - аяныс кеше. Мин, әлбиттә, аяныс булмаҫҡа тырыштым. Илем, халҡым, ерем-һыуым, тип йәшәнем Ҡулдан килмәҫтәй ауыр хеҙмәт һалдым. Инде күрәм... Мин, һин теләү менән генә булмай бит. Юлда үтә алмаҫтай кәртәләр ҙә бар...

Ҡыҫҡаһы, шул, Мәрйәм һылыу, һиңә һәм һинең шикелле изге маҡсат менән янып йөрөүсе барлыҡ райондаштарыма бик ҙур рәхмәт. Миңә өй кәрәкмәй. Ә бына район үҙәгендә әҙәби үҙәк ойоштороп, халҡыбыҙҙың ижадҡа булған ынтылышын күтәрмәләп торорлоҡ берәй йорт булдырыу насар булмаҫ ине. Йәш таланттар үҫтереү өсөн әһәмиәте ҙур булыр ине уның. Ғөмүмән, башҡорт әҙәбиәтен Бөтә Союз күләменә сығарыуҙа роль уйнаған яҙыусылары булған районға был хаҡта уйларға ла, үҙ ижадсылары менән ғорурланырға ла урын юҡ түгел.

Быйыл районға ҡайтып, әҙәби осрашыуҙар үткәреп йөрөргә бик теләр инем. Мөмкин булһа, Мәрйәм һылыу, ошоно эшләргә кәрәк. Киләһе йыл әллә барып була, әллә юҡ, тигәндәй... Районды бер йөрөп сығаһым, халҡым менән иркенләп осрашҡым килә.

Хатым буталсыҡ булды. Бөгөн төн буйы йоҡламай сығыуҙың һөҙөмтәһе был. Ысынлап та, мин үҙемдең ҡартлыҡты онотоп, хәҙер булһа ла үҙ яғыма ҡайтып йәшәү, үлгәс тә үҙ еремә ятыу хаҡында уйлап-хыялланып йөрөй икәнмен дәһә! Әле уйлап ҡараһам, бөтәһенә лә һуңлап ҡалғанмын икән... Ә шулай ҙа, Аллаға шөкөр, ижад шишмәм ҡоромаған. Өҫтәлемдә ике яңы әҫәр яҙа һалып бөтөүҙе көтөп, тиртеп ята.

**Сәләм менән З. Биишева.**
**30. 06. 1983 йыл,**
**Мәскәү".**

* * *

**"Ҡәҙерле Мәрйәм һылыу һәм балалар!** Мин ғинуарҙан бирле Малеевкала йәшәйем. Ике айға путевка һатып алып килдем. Сәләмәтлегем ныҡ ҡаҡшағайны бит. Малеевкала йылы, тәрбиә яҡшы, әкренләп нормаға инеп барам. Тағы бер аҙна ял итәм дә, унан әкренләп эшкә тотонорға, тип уйлап торам. Бөгөн бына тәү тапҡыр ҡәләмгә тотоноп, һиңә хат яҙырға ултырҙым.

Миңә йорт төҙөү мәсьәләһе нисек тора? Башланмаһа, Мәрйәм һылыу, район етәкселәренең теңкәһенә тейеп маташма инде, йәме. Мин теләнселәп барған кеүек булыр. Дөрөҫөн әйткәндә, минең генә түгел, атай-әсәйемдең, дуҫтарымдың эҙен юйып, ҡәберҙәренә тиклем һөрөп бөткән, мин һөйгән сәскәле болондарҙың, суҡ тирәктәрҙең тамырын ҡороткан ергә был йәштә ҡайтып ултырыуҙың ни мәғәнәһе бар? Халҡыбыҙҙың ҡомартҡыны, аманатты онотоуы, баһалай белмәүе бик ҡыҙғаныс...

Ярай, хуш, һау бул. Сәләм менән З. Биишева.

**22. 01.1984 йыл,**
**Мәскәү".**

* * *

**"Мәрйәм һылыу!** Мин күптән түгел бер хат яҙып ебәргәйнем, моғайын, алғанһыңдыр. Әллә ниндәй бик күңелһеҙ, өмөтһөҙ тойғоларға бирелеп ултырғанда яҙғайным шикелле. Әле уйлап ултырҙым да, ул музей йортто булдырыу минең шәхси мәнфәғәтемдәге мәсьәлә түгел дә баһа. Уның әһәмиәте беҙҙең әҙәбиәтебеҙ өсөн, беҙҙең халҡыбыҙҙың культураһы өсөн кәрәкле лә баһа! Шулай булғас, уны булдырыу беҙҙең башҡорт совет әҙәбиәте тарихы өсөн бик әһәмиәтле бер өлөш индереү булыр ине лә баһа, тигән фекергә килдем. Шулай булғас, был мәсьәләлә һеҙ - был эште башлап йөрөүселәр - минең кәйефкә лә, һауһыҙлыҡҡа ла ҡарап эш итергә тейеш түгелһегеҙҙер. Хатта уны ҡайҙа, ҡайһы ауылда төҙөү мәсьәләһен дә үҙ мөмкинлектәрегеҙгә, тарихи дөрөҫлөккә таянып эш итергә тейешһегеҙҙер, тигән фекергә килеп ултырам.

Әле бына Ҡаҙандан бер татар яҙыусыһы менән һөйләшеп, шуны белдем: Туҡайҙың тыуған ерендә бик яҡшы итеп ике ҡатлы йорт һалып, музей булдырғандар, шунда ул тыуған өйҙө шул саҡтың йыһазланышы менән "терелтеп" ултыртҡандар икән. Бында мин, әлбиттә, үҙемде Туҡайға алып барып тиңләргә тырышҡан өсөн түгел, бәлки, үҙ яғым өсөн мин дә арыу ғына хеҙмәт күрһәткән кеше булараҡ, уй йөрөтөргә, ниндәй изге эштәргә өмөт итергә хаҡлымындыр, тип уйлап яҙам. Тик был минең серем, һылыу.

Ярай, хуш, һау бул, Мәрйәм һылыу. Изге эштәреңдә уңыш, ижад ҡыуаныстары теләйем. Балаларға сәләм. Зәйнәб Биишева.

**10.01.1984 йыл.**
**Мәскәү".**

* * *

Был хаттарҙан күренеүенсә, Зәйнәб апай үҙе иҫән саҡта уҡ, уҡыусыларҙы әҙәбиәткә ылыҡтырыу, яҙыуға һәләтле балаларҙы үҫтереү мәсьәләһе тураһында хыялланған. Тап ошо юл, әҙәби уҡыуҙар саралары аша йәш быуынды әҙәбиәткә ылыҡтырыу, башҡорт әҙәбиәтенең классикаһы менән таныштырыу мөмкин икәнлеге кемгә-кемгә - әҙәбиәт уҡытыусыларына яҡшы билдәле. Күгәрсен районы мәғариф бүлеге үҙенең күренекле яҡташ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваға ҡарата һәр ваҡыт иғтибарлы булды, уға "Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы" тигән исем юллау мәлендә (РОНО методик бүлек етәксеһе А.И. Сәйетҡолов ине) иң беренселәрҙән булып ҡултамғалар йыйыуҙы ла ойоштторҙолар. Мин ул йылдарҙа "Урал" Башҡорт халыҡ үҙәгендә яуаплы сәркәтип вазифаһын башҡара инем, был сарала туранан-тура ҡатнаштым. Әле лә яҙыусының яҡташ уҡытыусылары бик урынлы мәсьәлә күтәрә: Зәйнәб Биишева уҡыуҙары үткәрәйек, ти улар. Был сараны күтәрмәләп алыу халыҡ яҙыусыһының тағы бер хыялын тормошҡа ашырыу булыр ине.

Зәйнәб апай менән аҙ йөрөлмәне ауылды һаҡлап ҡалыу буйынса. Мин "Бөгөнгөбөҙ һәм иртәгәһе көнөбөҙ хаҡына" тигән мәҡәләләр менән ҡабат-ҡабат сығыш яһағас, Башҡорт АССР-ы Төҙөлөш эштәре буйынса дәүләт комитеты рәйесе Л. В. Хихлухаға мөрәжәғәт иттем, бер нисә тапҡыр Күгәрсен районы етәкселәре менән һөйләштем, ниһайәт, Зәйнәб апайҙың үҙе менән БАССР Министрҙар Советы рәйесе Зекериә Аҡназаровҡа индек һәм "боҙ ҡуҙғалды". Күгәрсен районының генераль планы буйынса перспективаһыҙ ауылдар иҫәбенә индерелгән Туйымбәт ауылы яҙмышы ҡайтанан ҡаралып, редакцияға ыңғай яуап килде.

Шәреҡ донъяһында ҡатын-ҡыҙ яҙыусыларҙан иң беренселәрҙән булып трилогия яҙған Зәйнәб Биишеваның тыуған ауылын һаҡлап алып ҡалыуҙа өлөшөм булыуына бик шатланам. Ейәнсура районы яғына үткән саҡта Туйөмбәт ауылының һаман үҫә барыуы, яңы йорттар ҡалҡып сығыуы, архитекторҙар Наил Ғәлиев менән Рудоль Әүсәховтарҙың башҡортса алымдар менән эшләнгән проекты буйынса төҙөлгән йорт-музейҙы күреп үтеү күңелемдә сикһеҙ ҡәнәғәтлек тойғоһо уята.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

*ӘЙҘӘ, ФЕКЕРЛӘШӘЙЕК!*

# БАЛАМ, ТИГЕН...

**Ҡулыма ҡәләм алырға улым менән булған бер һөйләшеү мәжбүр итте. Ул миңә ейәнемдең ҡылыҡтарын һөйләп ултырҙы ла, аҙаҡтан ғына: "Ислам (8 йәштә) миңә "Атай, ни эшләп һин миңә "улым" тип әйтмәйһең?" тип дәғүә белдерҙе бит әле", - тип өҫтәп ҡуйҙы. "Ә ниңә әйтмәйһең һуң, әйт, "улым", тип өндәш һәр ваҡыт. Тиҫтерҙәренә аталарының "улым" тиеүен ишеткәндер", - тип кәңәш иттем дә, уйға ҡалдым...**

Ысынлап та, күптәребеҙ балаларыбыҙға ла, ир-ҡатындарыбыҙға ла, сит кешеләргә лә исеме менән генә өндәшәбеҙ. Шулай итеп туғандарыбыҙҙы ла, балаларыбыҙҙы ла сит кешегә әйләндерәбеҙҙер ул. Бына мин бер әбейҙе беләм. Ул күптән инде үҙҙәре олатай-өләсәй булып бөткән балаларына ла "Бәпәйем", "Балам", "Улғынам", "Ҡыҙым" тип өндәшә. Һәр ерҙә, һәр кемгә балаларын маҡтап һөйләй. Күптәр уға көлөп ҡарай, ә өлгө алырға кәрәклеген уйламай ҙа. Ә бит был әбейҙең балалары ла атаәсәләренә ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеп, матур итеп донъя көтә. Сөнки уларҙың ҡанына һеңгән: улар әсәләренең изге, ҡәҙерле балаһы, бәпәйе...

Уйлап ҡараһаң, иренә лә, балаһына ла исеме менән өндәшеп, әсә кеше үҙе лә аңғармаҫтан уларҙы тигеҙләй, шулай уҡ ҡыҙына ла, килененә лә исеме менән мөрәжәғәт итеп, ҡайһыһы ҡыҙы, ҡайһыһы килене икәнлеген дә оноута. Күптән түгел был тема буйынса "Киске Өфө" гәзитендә лә бер мәҡәлә донъя күргәйне: ҡәйнә әсәй булмай, уға шулай тип өндәшеү үҙ әсәйеңде һанламау була, шулай уҡ ҡайнаға - ағай, ҡайынбикә апай була алмай, тигәнерәк фекер яҙылғайны унда.

Башҡорт теле бик бай, унда туған-тыумасалыҡты белдергән бына тигән һүҙҙәр бар: ҡәйнәм, бейемем, ҡайным, ҡәйнеш, ҡусты, балдыҙ, һеңлем, һылыуым, бажа, ҡоҙа, ҡоҙаса, ҡоҙағый, мыртый, ҡәйенбикә, ҡәйенеңгә, ҡәйенеҙнә һ.б. Уларҙы телдәребеҙгә кире ҡайтарайыҡ, тимәксемен. Әгәр балаларыбыҙға көн һайын "улым", "ҡыҙым" тип йышыраҡ ҡабатлаһаҡ, уларҙың ата-әсәләре менән күңел яҡынлығы ла нығыраҡ булыр ине һымаҡ. Ә гәзит уҡыусылар ошо хаҡта ни уйлай икән?

**Гөлдәр ӘЛИБАЕВА.**
**Баймаҡ районы Билал ауылы.**

*ХӘТЕРКИТАП*

# БЕР БЕЙЕҮҘЕҢ ТАРИХЫ

**Хәтирәләр ебен һүтә башлаһаң, үткәндәр төҫлө фильмдағы кеүек: бер ваҡиға артынан икенсеһе иҫкә төшә - ваҡ деталдәр тоноҡланған, әммә кәрәклеһе хәтерҙән юйылмаған.**




80-се йылдар. СССР-ҙың гөрләп сәскә атҡан сағы. Ауыл ерендәге колхоз-совхоз баҫыуҙарында ялан батырҙары ең һыҙғанып эшләй. Илебеҙ тырыш хеҙмәт менән КПСС-тың XXVI съезын ҡаршылай. Әбйәлил районының шул осорҙағы "Заветы Ильича" колхозы ла илдәге ваҡиғаларҙан ситләшмәй. Колхоз майҙаны бик ҙур, шуға уны ялан һәм тау зонаһына бүлеп йөрөтәләр. Халыҡта "степные пашут, лесные пляшут", тигән лаҡап таралғайны. Ысынлап та, райондың таулы яҡтарында ул осорҙа бейеү сәнғәтенә иғтибар ҙурыраҡ булды. Етмәһә, "Заветы Ильича"колхозының парторгы мәрхүм Салауат Сәрүәр улы Ҡадиров мәҙәниәттең нескәлектәрен яҡшы төшөнгән, үҙе лә баянда өҙҙөрөп уйнаған тырыш кеше булды. Ул Стәрлетамаҡ культура-ағартыу училищеһы студенттары менән бәйләнешкә инеп, Рысҡужа ауылынан Зиннәт ағайҙың ҡыҙы Зөһрәне ауылға практикаға саҡыртып ҡайтартты. Шулай бынамын тигән бейеү коллективы тупланды.

Мин ул мәлдә Амангилде урта мәктәбендә рус теле һәм әҙәбиәтенән уҡыта инем. Шаһыбалова Илүзә - башҡорт теленән, Нәбиуллина Зиләрә химиянан уҡыта. Өс йәш ҡыҙ өсөн Зөһрә "Бөрйән ҡыҙҙары" бейеүен бик ентекләп өйрәтте. Өсөбөҙҙөң дә сәс толомдарыбыҙ оҙон, сулпылар таҡһаҡ, бигерәк килешеп тора. Етмәһә, район мәҙәниәт йортонда беҙгә яраҡлы ғына йәшел еләндәр, һары күлдәктәр, төлкө тиреһенән тегелгән бүректәр бар икән. Шуны ла әйтеп үтергә кәрәк, беҙгә тәғәйен бейеү беҙ күреп күнеккән "Бөрйән ҡыҙҙары"нан күпкә айырыла, хәрәкәттәре лә башҡаса ине. Үҙе йыуантығыраҡ булһа ла, Зөһрә бейеү хәрәкәттәрен шундай оҫта итеп башҡара: беҙ уға һоҡланып, ауыҙыбыҙҙы асып, хайран ҡалып ҡарап ултыра торғайныҡ. Бер өйрәнеп алғас, кинәнеп бейейбеҙ. Һәр концерт һайын халыҡ алҡышлап, сәхнәгә ҡабат-ҡабат саҡыра. Хатта мәктәп завучы Хәмзин Әшрәф Мостафа улы ла беҙҙе тотоп тора алмай. Берәй ерҙә концерт менән йөрөгәндә ишетеп ҡалды ниһә, икенсе көнөнә уҡ дәрескә инеп ултыра, дәфтәрҙәрҙе тикшерә. Ләкин беҙ ҙә сос - йәшлек дәрте ташып тора, дәрес пландарын алдан уҡ әҙерләп ҡуябыҙ, бейейбеҙ ҙә, уҡытыуҙа ла тырышбыҙ, һүҙ теймәй.

Бейей-бейей бик оҫтарып киттек, ахыры, район күләмендә үткән концерттарға ла саҡыра башланылыр. Тамашасылар ҙа бейеүҙе яратты. "Бөрйән ҡыҙҙары"ның көйө ишетелеү менән сәхнә артындағылар ҙа, эркелешеп, ул мөйөштән был мөйөшкә йыйылып китерҙәр ине. Колхоз коллективы менән бер нисә тапҡыр Өфөгә лә барып ҡайттыҡ, беренсе республика фольклор байрамында ҡатнаштыҡ. Ниһайәт, шатлыҡлы хәбәр ишеттек: райондан беҙҙе, өс ҡыҙҙы, Мәскәүгә ВДНХ-ла үткән фольклор фестиваленә ебәрәләр икән! Республиканан бөтәһе ете кеше бара. Хәйбулла районынан өс кеше: мәҙәниәт бүлеге мөдире менән данлыҡлы ҡурайсы, ун бала атаһы - Сәйфулла Дилмөхәмәтов һәм ҡумыҙсы бер егет, сәнғәт институтының өсөнсө курс студенты, баянсы Риф исемле егет һәм беҙ - өсәү. Башта беҙҙе филармонияға йыйып таныштырҙылар. Бейеүҙе ҡарағас, артабан өйрәтеү өсөн балетмейстер беркеттеләр. Мәҙәниәт министры урынбаҫары Нәбиуллин Әбйәлилдән алып килгән костюмдарыбыҙҙы һис тә оҡшатманы. "Өс бөртөк ҡыҙына әбйәлилдәр костюм да тектерә алмаған", - тип әрләп ташланы хатта. Өфө буйлап беҙгә костюмдар эҙләй башланылар һәм ауыл хужалығы институтынан барып таптылар.

Шулай тырышып йүгереп йөрөүҙәренең сәбәбе: беҙҙе мәҙәниәт министрына күрһәтеүгә әҙерләйҙәр икән. Көтәбеҙ. Бына мәҙәниәт министры В. Дауытов килде. Бөтәһе лә үрә тороп баҫты. Беҙ иһә ҡыҙара-бүртә үҙ бейеүебеҙҙе күрһәттек. Сәстәребеҙҙе шул көйөнсә генә үреп төшөргәнбеҙ, әллә ниңә сулпыларҙы ҡушып өлгөрмәгәнбеҙ. "Сәстәре үҙҙәренекеме?" - министрҙың берҙән-бер һорауы шул икән, башҡа күрһәтмәләре булманы.

Мәскәүгә осоҡ. "Байкал" ҡунаҡханаһына урынлаштырҙылар. Ете бөртөк кенә булһаҡ та, милли кейемдәребеҙ сағыу булғанғамы, ҡайҙа барһаҡ та иғтибар үҙәгендәбеҙ. Көн дә ЗИЛ-да мәҙәниәт һарайына автобус менән репетицияға алып йөрөйҙәр. Программа буйынса ап-аҡ буркалар кейгән ун грузин егете йырлап бөткәс тә, "Бөрйән ҡыҙҙары" бейеүе башлана. Бейегән ваҡытта грузин егеттәренең ҡарашы беҙҙең оҙон толомдарға текәлгәнен тоябыҙ. Татарстандандан килгән оркестр ҙа беҙҙең сығышты ҡүҙәтә. Бер көн бейегәндә Зиләрәнең сулпыһындағы көмөш тәңкә өҙөлөп төшкән. Сығыштан һуң сәхнә артына сыҡһаҡ, бер татар егете: "Кемегеҙҙеке?" - тип йылмайып, тәңкәне күрһәтә. Тимәк, ул егет көмөш тәңкәнең баһаһын белгәндер, тип уйлайым. Ололар көмөштөң гонаһы ауыр тиҙәр - уны һатып алырға йә бүләк итергә генә мөмкин.

Сәйфулла ағайҙың күкрәккә һалып ҡурайында һыҙҙырып уйнап ебәреүҙәре үҙе бер ғүмерлек иҫтәлек булып ҡалған. Әле лә бер нәмәгә үкенәм: уның уйнауындағы ҡайһындай көйҙәрҙе магнитофонға яҙҙырып алырға баш етмәгән. Башҡаса Сәйфулла ағай менән осрашырға насип булманы. Йәшлек арҡаһындалыр инде, арҙаҡлы шәхес эргәһендә йөрөүебеҙҙең ҡәҙерен тоймағанбыҙ. Ҡайһылай күңелле замандарҙа эшләп, йәшәп ҡалғанбыҙ! Ул саҡта:

"Кыуып етербеҙ, уҙып китербеҙ
Американы яҡын көндәрҙә!" - тип йырлай торғайныҡ. Тимәк, коммунизмда йәшәй башлағанбыҙ, тик белмәгәнбеҙ генә.

**Роза ҒӘЛИМОВА.**
**Әбйәлил районы Хәлил ауылы.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# АТА-БАБАМ ДӘЛИЛДӘРЕ БАР

Телевидениела "Зәңгәр ут" тапшырыуына төшкәндә бер рус журналисы менән бер өҫтәл артына тура килдек. Ғүмер буйы Башҡортостанда сыҡҡан баҫмаларҙа эшләй, тимәк, Башҡортостан, уның кешеләре тураһында яҙа. Журналист кеше мәғлүмәтле булырға тейеш, тигәндән сығып фекер йөрөтһәк, республикабыҙ, уның төп милләте - башҡорттар тураһында ла хәбәрҙар булырға тейеш була түгелме? Ә ул мине аптыраууҙың сигенә сығарҙы.

-Башҡорттарҙың милли кейемен Фәйзи Ғәскәров уйлап сығарған бит. Ә ысын башҡорт кейеме онотолған, уны бер кем дә белмәй, - тип әйтеп һалды бер саҡ коллегам. Тәүҙә был шаярталыр тип уйланым, шуға тыныс ҡына:

- Ниңә белмәһен, һәр ваҡыт белгәндәр. Һәр ырыу үҙ кейемен хәтерләй, шуны бына хәҙер аяҡҡа баҫтыралар, - тигән булдым.

Ул тағы дауам итте:

- Бәктиһәң, башҡорттар элек эсмәгән, тигән хәбәр дөрөҫ түгел икән... - тине, тағы ниҙер мығырҙаны. Был юлы ла тыныслыҡ һаҡланым һәм аҡлана торған төрлө дәлилдәр килтерҙем.

Яңы йыл тапшырыуы булғас, ниндәйҙер бер насар ғына сапанмы, еләнме кейҙерҙеләр тегегә. "Юрматы башҡорттарының еләнелер инде был", тине был тағы ла. Минең түҙемлегем шартлай яҙҙы, шулай ҙа үҙ-үҙемде ҡулға алып, йылмайған булып: "Юҡ, беҙҙең юрматылар ғүмерҙә лә бындай кейем кеймәгән. Был бөтөнләй башҡорт еләненә оҡшамаған, ә ниндәйҙер Рязань урыҫының халатылыр был!" - тинем. Әңгәмәсем шунан һуң өндәшмәҫ булды. Мин дә уға һүҙ ҡатманым.

Бына шулай, башҡа милләттәр менән табындаш булғанда ла, юлдаш булғанда ла, һөйләшкәндә лә миңә, башҡорт кешеһенә, һәр ваҡыт нервыларымды көсөргәнештә торорға тура килә. Әлдә әле ундай кешеләрҙең ахмаҡ һүҙҙәренә ҡаршы ҡуйыр аҡыллы, төплө дәлилдәребеҙ бар. Ул дәлилдәрҙе ата-бабаларыбыҙ меңәр йылдар дауамында туплаған, кәрәк саҡта, ҡан түгеп яулаған, быуындан-быуынға аманат итеп тапшырған. Уларҙы өйрәнәйек, беҙҙе инҡар итергә маташыусылар алдында телһеҙ-өнһөҙ булмайыҡ, тип әйтке килә.

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

*ЗАУЫҠ*

**Үҙ ғүмерендә шиғыр яҙып ҡарамаған кеше, бигерәк тә башҡорт кешеһе бармы икән? Уларҙың ҡайһы берҙәрен гәзит уҡыусылары менән осрашыуҙарҙа йөрөгәндә, халыҡ араһында булғанда осратабыҙ. Уларҙың үҙҙәре өсөн генә тип яҙған шиғырҙары араһында гәүһәрҙәрҙе осратаһың да, эх, әгәр ҙә уның авторы икенсерәк тормош юлын һайлап, ижад юлын үҙ итһә, әҙәбиәтебеҙ бынамын тигән шағирлы йә шағирәле булыр ине, тип ҡуяһың. Бына ошондай авторҙарҙың береһе - Көйөргәҙе районының Бәләкәй Муса ауылында тыуып үҫкән өс бала әсәһе, уҡытыусы, матбуғат хеҙмәткәре Хәлиҙә Алтынбаева, псевдонимы - Хәлидиә Миһрани.**
**Ул бөгөн хаҡлы ялда, Өфөлә йәшәй.**

# ШИҒРИ КҮҢЕЛ

### Үҙе белә халыҡ

*(Аҡмуллаға эйәреп)*

Үҙе белә халыҡ: ҡайҙа ғәҙел хаҡлыҡ,
Ҡайҙа хурлыҡ, ҡайҙа мутлыҡ, ҡайҙа аҡлыҡ.
Үтһәләр ҙә йылдар хатта ҡырҡлап-ҡырҡлап,
Ҡырын эш барыбер өҫкә сыға ҡалҡып.

Осоноша уҫал заттан түрәгара,
Изге йәндәр баҫылышып ситтә ҡала;
Иҫән саҡта белмәйенсә ҡәҙерҙәрен,
Гөлгә күмгән булабыҙ, әй, ҡәберҙәрен.

Әҙәпһеҙҙәр, һәләтһеҙҙәр, оятһыҙҙар,
Ҡомһоҙ, көнсөл, хәсәт әҙәм, хаяһыҙҙар.
Аңламай ҙа, аңғармай ҙа үҙ гонаһын,
Белмәй инде бер саҡ тамуҡта янаһын.

Табыналар алла күреп тик аҡсаға,
Ярлы булһа, белмәй-күрмәй туғанын да.
Ҡарап торһаң, торғаны бер фәрештәләр,
Аңлап алһаң, бер кем түгел - фәхишәләр.

Халыҡ һиҙә, халыҡ белә, халыҡ күрә,
Һуң булһа ла, бер саҡ килеп баһа бирә.
Ғәзиз ғүмерҙәр үтәлер шул, эй, заяға -
Үтһен ине халыҡ өсөн тик файҙаға.

### Ҡариҙел

Ҡариҙелдең текә ярҙарына
"Текә" тормош килеп төкөлгән.
Аҡсарлаҡтың аҡ тауышы ғына
Быуаттарҙан беҙгә төбәлгән.

Ҡариҙелдең ҡара тулҡындары
Ниҙер һөйләй аңлағандарға.
"Уфимка түгел мин!" тип уфтанамы?
Рәнйей шулай атағандарға.

Иҙел бит ул, Иҙел! Ҡара иҙел -
Аҡ Иҙелкәйемдең һыңары.
Тормошта бар ағы, ҡараһы ла,
Баҫмаһын тик ғәмһеҙ монары.

### Васыят

Беҙ киткәндән донъя түңкәрелмәҫ,
Туфан ҡалҡмаҫ, ҡояш тотолмаҫ.
Тик рухыбыҙ ғына һүрелмәһен -
Фәҡәт шунда халҡым отолмаҫ.

Дәүер үтә, илдәр, телдәр бөтә,
Ер ҙә ҡалып бара ҡураныс...
Беҙҙең шиғырҙарҙы кемдәр уҡыр,
Кемдәр аңлар - тик шул ҡыҙғаныс.

Өйрәт, балам, ул-ҡыҙына телде,
Индер аңдарына иманды.
Уҡырһығыҙ әле бер саҡ, тиеп,
Ҡалдырамын һеҙгә яҙмамды.

**Хәлидиә МИҺРАНИ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ТОРМОШҠА ЫҢҒАЙ ҠАРАШ...

## оҙон ғүмер шарты

■ АҠШ-тың Миннесота университеты ғалимдары көн һайын йогурт ашау ҡан баҫымы күтәрелеү сирен булдырмаҫҡа ярҙам итә, тип билдәләй. Йогурт составындағы кальций ҡан тамырҙарының һығылмалылығын һаҡларға ярҙам итә. Британияның диетологтар ассоциацияһы ағзаһы Рик Миллер аныҡлап китеүенсә, кальций ҡан тамырҙары һәм мускул системаһын нормала тоторға ярҙам итә. Быны тикшеренеүҙәр ҙә раҫлай. Көнөнә 120 грамм йогурт ашаған кешеләрҙә был сирҙәр барлыҡҡа килеү хәүефе 31 процентҡа түбәнәйгән. Әммә белгестәр иҫкәртеүенсә, аҙыҡ өҫтәмәһе булараҡ тәҡдим ителгән кальций кире тәьҫир итә - артерияларҙың стенаһы ҡалыная.

■ Италия ғалимдары борон күҙҙәрҙе дауалай торған дарыуға юлыға. Ул Тоскана ярҙары буйында батҡан боронғо карапта табылған. MedPortal хәбәр итеүенсә, был сауҙа судноһы Урта диңгеҙҙең Көнсығыш өлөшөнән быяла, амфора, яҡтыртҡыстар, аҡ ҡурғаш һәм бронза һауыттар тейәп ҡайтып килгәнендә Италия ярҙары буйында б.э тиклем яҡынса 130 йыл элек батҡан. Карап 1974 йылда табылған. Археологик эштәр барышында серегән ағас йәшниктәр эсендә һыуҙан зыян күрмәгән дарыуҙар һәм медицина ҡорамалдары ла осрай. Цинк берләшмәләренән, хайуан майҙарынан, крахмал һәм ҡарағай ылыҫынан торған дарыуҙарҙың составын, формаһын тикшереп ҡарағандан һуң, ғалимдар уларҙың күҙ ауырыуҙарынан ҡулланылыуын асыҡлаған - уларҙы борон ауырыу күҙҙең ҡабағына һалып дауалағандар.

■ Ғалимдар раҫлауынса, һәр кем 100 йәшкә тиклем йәшәй ала. Американың Джорджия штаты университетында ғүмерҙе оҙайтыу ысулдарын өйрәнеү буйынса ғилми эш алып барыла. Ғалимдар 2001-2009 йылдар араһында 100 йәш һәм унан да олораҡ 240 кешене тикшереп, ғүмер оҙайлығына тәьҫир итеүсе психологик һәм социаль факторҙарҙы асыҡлаған. Геронтология институты директоры һәм тикшеренеүҙәр авторы Леонард Пун белдереүенсә, оҙаҡ йәшәргә теләүселәргә тормошто тиң ыңғай яҡтан ҡабул итергә кәңәш итә. Был оҙағыраҡ йәшәүҙең иң мөһим факторы.

■ Цитрус емештәре составындағы берләшмәләр ҡатын-ҡыҙҙар араһында инсульт хәүефен түбәнәйтә. Норвичтағы Англия Көнсығыш университеты ғалимдары көндәлек рационы юғары күләмдәге флавонондарҙан торған ҡатын-ҡыҙҙар араһында ишемик инсульт менән ауырыу хәүефе 19 процентҡа кәмеүен асыҡлаған. Флаванондар - флавоноидтарҙың бер төрө, улар башлыса үҫемлектең пигментацияһы өсөн яуап бирә. Флавоноидтарҙың сығанағы булып цитруслылар, еләк-емеш, йәшел сәй, ҡыҙыл шарап, ҡара шоколад иҫәпләнә.

■ Ярты быуат элек музыканттар һәм һауынсыларҙың һөнәри сире иҫәпләнгән беләҙектең туннель синдромы сире бөгөн компьютер уйындары уйнарға яратыусылар ауырыуына әүерелә. Ҡул суҡтарының ҡабатланып торған һәм автоматизмға еткерелгән хәрәкәттәре һөҙөмтәһендә ҡулдарҙың һиҙгерлеге, хәрәкәттәр боҙола, һыҙлау, ауыртыу, беләҙек һәм ҡушар һөйәге өлкәһендә ҡалтырау барлыҡҡа килә. Быларҙы булдырмау өсөн табиптар 1-2 сәғәт һайын эште туҡтатып, ҡул суҡтарындағы ҡан әйләнешен яҡшыртыу өсөн бер нисә күнекмә яһарға тәҡдим итә.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# КИҘЕҮҘӘРҘЕҢ...

## төрлө- төрлөһө һөжүм итә



**Өфөлә киҫкен респиратор вирус инфекцияһы (ОРВИ) эпидемияһы иғлан ителде. Ә грипп йоҡтороусыларҙың күпселеге сусҡа киҙеүе менән сирләй. Күптән түгел генә әле Рәсәйҙең баш санитар табибы Геннадий Онищенко Өфө ҡалаһын ОРВИ менән сирләү буйынса эпидемия тупһаһын аша атлаған ҡалалар исемлегендә телгә алғайны. Ләкин беҙҙең табиптар эпидемия һәм карантин индереү тураһында белдерергә ашыҡманы.**

"Эпидемия тупһаһы норманан 30 проценттан ашып китмәй тороп, иҫкәртеү саралары үткәрелә башламаясаҡ",- тип белдерҙеләр Роспотребнадзорҙың төбәк идаралығында. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Өфөнөң ҡайһы бер дауаханаларында үткән аҙнала уҡ карантин иғлан ителде.

- Эйе, беҙ уны республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығы менән килешеп хәл иттек,- ти 21-се ҡала больницаһының баш табип урынбаҫары Людмила Кокина.- Беҙҙең меңдән ашыу пациентыбыҙ бар. Шуға күрә дауаханала вирус таралыуға юл ҡуймау маҡсатында ауырыуҙар янына килеүселәрҙе сикләргә тура килде.

Әлеге ваҡытта, контроль аҙнанан һуң, республика баш ҡалаһында эпидемия иғлан ителде. Ошо көнгә ОРВИ һәм грипп менән сирләүсе 8 600 кеше врачтарға мөрәжәғәт иткән, был күп йыллыҡ күрһәткестәрҙән 60 процентҡа юғары (республика буйынса 24 000 ауырыу, был күрһәткес эпидемия һыҙатынан 37 процентҡа юғары). Лаборатор тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, сусҡа киҙеүе әүҙемлек итә: анализ тапшырған 79 кешенең 20-һендә ошо төр вирус асыҡланған. Ҡала һаулыҡ һаҡлау идаралағында белдереүҙәренсә, был сир бер ирҙең ғүмерен ҡыйған да инде. Сусҡа киҙеүе сирле кеше сөскөргәндә, йүткергәндә, һөйләшкәндә бик күп бүленеп сыға һәм тирә-яҡҡа тарала. Вирус шулай уҡ көндәлек ҡулланыу әйберҙәре, һауыт-һаба, уйынсыҡтар, кейем аша ла йоғорға мөмкин. Врачтар һүҙенә ҡарағанда, сир йоҡтороусыларҙың күпселеге прививка яһатмаған булған. Өфө ҡалаһы һаулыҡ һаҡлау идаралығының баш эпидемиологы Светлана Йосопова әйтеүенсә, был ваҡытҡа ҡарата әле мәктәптәрҙә карантин индерелмәһә лә, бөтә ерҙә сирҙе иҫкәртеү саралары көсәйтелгән: биналарҙа ентекле санитар таҙартыу эштәре, битлек йөрөтөү режимы яйға һалынған. Ауырыусылар һаны күбәйгән һайын, терапевт һәм педиатрҙарҙың эш сәғәттәре оҙайтылған.

Ябай ОРВИ менән грипты нисек айырырға? ОРВИ ваҡытында сир әкренләп башлана, температура ла яйлап күтәрелә һәм күп осраҡта ул 38,5 градусҡа етә. Ауырыуҙың хәле ҡәнәғәтләнерлек була, ләкин мотлаҡ тымау, ҡоро йүткереү, сөскөрөү күҙәтелә һәм тамаҡ шешә. ОРВИ билдәләре, ғәҙәттә, тиҙ үтә. Ә грипп менән сирләү ҡапыл башлана, хәл киҫкен насарая, өшөтә, ҡалтырата башлай, күҙҙәр, маңлай тирәләре, баш ауырта, тән һыныға. Тән температураһы бер-нисә сәғәттә 40 градусҡа етергә мөмкин. Был осраҡта тымау булмаһа ла, ныҡ йүткертә һәм түш ауырта. Тамаҡ ауыртыу ҙа, сөскөрөү ҙә күп осраҡта күҙәтелмәй. Дауаланғандан һуң да, хәлһеҙлек, баш ауыртыуы, көйһөҙлөк 1-2 аҙнаға һуҙылырға мөмкин. Сусҡа киҙеүе йоҡторған осраҡта иһә ауырыу нык тирләй, унда яҡтынан ҡурҡыу була, быуын һәм мускулдар ауырта. Был киҙеү шулай уҡ тамаҡты һәм ҡурылдайҙы ла зарарлай, ауырыуҙа ағыуланыу симптомдары күҙәтелә.

### Табип кәңәштәре:

● Тән температураһы юғары күтәрелгәндә иң тәүҙә врачҡа мөрәжәғәт итеү хәйерле, айырыуса балалар сирләгәндә. Әгәр баланың тәне тартыша башлаһа, уның температураһы 37,5 градус булған осраҡта ла уны төшөрөргә тырышырға кәрәк. Башҡа осраҡтарҙа тән температураһы 38-ҙән юғары күтәрелһә генә уны түбәнәйтеү саралары башлана.

● Грипп менән ауырығанда үҙ белдегең менән дарыуҙар, айырыуса антибиотиктар ҡулланыу ярамай. Ә бына вирустарға ҡаршы препараттарҙы ауырығандың тәүге ике көнөндә үк ҡабул итеү кәрәк, тик уларҙы ла врач тәғәйенләргә тейеш.

● Грипп вирусынан һаҡланыуҙың иң арзан һәм ябай юлы - ҡулдарҙы йышыраҡ йыуырға һәм битлек кейеп йөрөргә тартынмаҫҡа. Врачтар әйтеүенсә, һаҡлағыс битлек йөрөтөүселәрҙең 60 процентына сир йоҡмай.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1434 һижри йыл.*

| Ғинуар | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 28, дүшәмбе | 8:45 | 10:15 | 14:30 | 17:13 | 18:43 | 20:13 |
| 29, шишәмбе | 8:43 | 10:13 | 14:30 | 17:15 | 18:45 | 20:15 |
| 30, шаршамбы | 8:41 | 10:11 | 14:30 | 17:17 | 18:47 | 20:17 |
| 31, кесе йома | 8:40 | 10:10 | 14:30 | 17:20 | 18:50 | 20:20 |
| 1, йома | 8:38 | 10:08 | 14:30 | 17:22 | 18:52 | 20:22 |
| 2, шәмбе | 8:36 | 10:06 | 14:30 | 17:24 | 18:54 | 20:24 |
| 3, йәкшәмбе | 8:34 | 10:04 | 14:30 | 17:26 | 18:56 | 20:26 |
| 4, дүшәмбе | 8:32 | 10:02 | 14:30 | 17:28 | 18:58 | 20:28 |
| 5, шишәмбе | 8:30 | 10:00 | 14:30 | 17:30 | 19:00 | 20:30 |
| 6, шаршамбы | 8:28 | 9:58 | 14:30 | 17:32 | 19:02 | 20:32 |
| 7, кесе йома | 8:27 | 9:57 | 14:30 | 17:34 | 19:04 | 20:34 |
| 8, йома | 8:25 | 9:55 | 14:30 | 17:36 | 19:06 | 20:36 |
| 9, шәмбе | 8:22 | 9:52 | 14:30 | 17:38 | 19:08 | 20:38 |
| 10, йәкшәмбе | 8:20 | 9:50 | 14:30 | 17:40 | 19:10 | 20:40 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# ИММУНИТЕТТЫ...

## нисек нығытырға?

**Һалҡын миҙгелдәргә хас булған вируслы сирҙәр әүҙемләшкәндә организмға нисек ярҙам итергә һуң?**

● Йыш арыу, даими рәүештә көсөргәнештә булыу иммунитетты түбәнәйтә. Әлбиттә, тормошта күңелһеҙ осраҡтар ҙа йыш осрай, тик шулай ҙа көн һайын насар кәйефтә йөрөү яҡшы түгел. Бәлки, һеҙгә тормошоғоҙҙа нимәнелер үҙгәртергә ваҡыт еткәндер? Шулай уҡ йылы ванна, иртәрәк ятып йоҡлау ҙа арыуҙы еңергә ярҙам итә.

● Табиптар белдереүенсә, иммун системаһы аҡһымды күп ҡуллана. Иммунитет һәр сиргә лайыҡлы яуап бирә алһын өсөн, организм бер нисә миллиард яңы күҙәнәк һәм аҡһым эшләп сығарып тора. Беҙ ни тиклем дөрөҫ туҡланабыҙ, ризығыбыҙ витаминдарға бай була - шул тиклем организмға иммунитетты һаҡлауы еңелерәк. Ҡыҫҡаһы, өҫтәлегеҙҙә аҡһымға бай аҙыҡтар - ит, һөт ризыҡтары һәм емеш-еләк, йәшелсә күберәк булһын.

● Һарымһаҡ, һуған, йәшел тәмләткестәр, брокколи кәбеҫтәһе, кишер, сәй, имбирь - быларҙың барыһы ла иммунитетты нығытырға мөмкинлек бирә. Етмәһә, һарымһаҡ, һуған һәм имбирь тәбиғи антисептик иҫәпләнә.

● Әгәр ҙә фатирығыҙҙағы һауа таҙараҡ булһын тиһәгеҙ, ароматерапияға мөрәжәғәт итегеҙ. Сәй, бөтнөк, эвкалипт, кипарис майҙары һауалағы вирустарҙы бөтөрә.

● Һыуыҡта ғәҙәттә өйҙә генә ултырғы килә. Ә был миҙгелдә, киреһенсә, йышыраҡ хәрәкәт итеү кәрәк. Йүгереү, бассейн, фитнес, спорт секциялары иммунитетты нығытыусы саралар.

● Тәнде сыныҡтырыу ҙа беҙҙе сәләмәт итә. Һыу менән ҡойоноу миҙгел сирҙәренә ҡаршы торорға булышлыҡ итә.

● Кәйеф гел күтәренке булырға тейеш, шул саҡта бер сир ҙә йоҡмаясаҡ. Шуға ла, сәләмәт булам, тиһәгеҙ, яҡшы кәйефтә булығыҙ.

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...

# ХӘРЕФ-ӨНДӘР АТАМАҺЫ ҺӘМ...

## һандар хикмәте

Эске донъяңды танып белһәң, тышҡы донъяның закондарын да тәрәнерәк төшөнә башлайһың. Юҡҡа ғына боронғолар: "Үҙ-үҙеңде танып бел һәм һин Аллаһы Тәғәләне лә танып белә алырһың!" - тимәгән бит. Бына ошо әйткәндәрҙән сығып, аҙ ғына булһа ла боронғоларҙың ғилем хикмәттәрен сырамытып, үткән 2012 йылдың, бигерәк тә өс тапҡыр 12 тура килгән көндө иҫтә тотоп, мәғәнәүи йөкмәткеһен асыҡлап ҡарайыҡ.

12 һанының беҙҙең заман өсөн киң билдәле булған сифаттарына туҡталып тормайым. Улар һәр кемгә билдәле. Уның боронғо алфавит йөкмәткеһе менән бәйле осрағына ғына иғтибар итәйек. Әйтеүебеҙсә, боронғо ваҡытта һандар хәрефтәр менән яҙылып йөрөтөлгән. Ошо күҙлектән сығып яҙһаҡ, 12 һанын ике хәреф - "и" һәм "б" менән яҙыр инек. "И" өнөнөң һаны - 10, "б" өнөнөң һаны - 2. Өндәрҙе ҡушып әйткәндә, был ике һан "Иб" һүҙен тыуҙыра. "Иб" һүҙе боронғо Мысырҙа "йөрәк" тигәнде аңлатҡан. Башҡорт телендә лә был һүҙҙәң атамаһын эсенә алған һүҙҙәр арыу ғына. Мәҫәлән, ип+тәш, ип+һеҙ, иб+әтәйһеҙ, ип+кен (әйтелештә һүҙ һәм ижек аҙағында "б" өнө һаңғыраулана). "Ипкен" һүҙендә һүҙҙең ҡояш символы булған йөрәктең йылылығы, яҡтылыҡ сифаттары сағыла. "Ипкене бәрелеп тора", тибеҙ.

Ә хәҙер ошо өндәрҙең хәреф булараҡ атама йөкмәткеһенә туҡталып китәйек. "И" өнөнөң хәреф атамаһы "Йуд" ("Йод" тип тә йөрөтөлә). Грек телендә "и" өнөнөң хәреф атамаһы "иот, иота". Киреһенсә уҡыһаң, "той, тойа" һүҙҙәре килеп сыға. Башҡорт телендәге "йот" һүҙенең мәғәнәһен аңлатып тораһы ла юҡ. "И" өнө тәбиғәт көстәре менән бәйлелегендә ер-һыу көстәренә ҡарай, шулай булғас, был һүҙҙәрҙең тойоу, һиҙеү, йотоу (тәмләү) менән бәйле булыуына һис аптырайһы түгел. "Иуд" хәрефенең атамаһы "уй" тигән мәғәнәне символлаштыра. "Йуд" атамаһындағы һул яҡтағы ижекте уң яҡтан уҡыһаң, башҡортса "уй" һүҙе килеп сыға. Атаманың икенсе өлөшө "уд" (санскрит телендә бар), мәғәнәһе - "башланғыс" ("начало"). Был һуңғы ижектең кирегә уҡылышы - "дуа" - йәһүд телендә "ике", "икеләнеү" тигән мәғәнә бирә. Урыҫ телендәге "два" һүҙенә лә оҡшаш, "дуализм" тигән һүҙҙе тыуҙырыуҙа ла ҡатнашлығы барҙыр, тип уйларға була.

Һәр кемгә билдәле: унды икегә бүлһәң, биш була. Биш һаны "йуд" хәрефенең икенсе мәғәнәүи йөкмәткеһе менән туранан-тура бәйле. Уның мәғәнәһе - "ҡул". Ҡул булараҡ, ул тамамланғанлыҡты, тулылыҡты, беҙҙең халыҡ йолаһынан сығып, ихласлыҡты ла үҙ эсенә алған, сөнки башҡорт халҡының көнкүреш сәнғәтендә был хәрефтең идея-йөкмәткеһе шаҡтай сағыу ҡулланылыш тапҡан. Беҙҙең ҡымыҙ өсөн тәғәйенләнгән ижау-сүместәрҙә ошо хәрефтең мәғәнәһе айырым асыҡ бирелә. Ижау - ҡуш усты хәтерләтә. Ижау атамаһының "жау" өлөшөнөң һан суммаһы ла шулай уҡ 10 һанын бирә: жим - 3, а - 1, у - 6. 3+1+6=10. Яһалышы яғынан да 12 - "иб" менән оҡшаш, ә һүҙ ижектәре менән тулыһынса тап килә. Ижауҙың эшләнеше һыу ҡошо өйрәкте хәтерләтә. Ә "б" хәрефенең атамаһы - "өй". "-Рәк" ижеген кире уҡыһаң, башҡорт телендәге көстө белдергән "кәр" һүҙе килеп сыға. Тимәк, өйрәк өйҙөң көсө, йөрәге. Ҡытайҙарҙа ла өйрәк-мандаринкалар өй ҡото символы иҫәпләнә. Ә беҙҙең эпоста ул ҡатын-ҡыҙ геройҙар менән туранан-тура бәйләнешле образ.

Ижауҙағы "йуд" хәрефе, 10 һаны менән бәйле тағы бер деталгә иғтибар итмәйенсә булмай. Күп кенә осраҡта ижауҙың һабында өс вертикаль бағана бар. Ос таған, өс таған исеме аҫтында йөрөтөлгән, донъя яратылыуҙың тәрән символик мәғәнәһен үҙ эсенә йәшергән хикмәтле өс бағана. Был өс бағана, өс таған башҡорт халҡы Ибраһим бәйғәмбәрҙең "Сефер Йецира" - "Яратылмыш" ("Книга создания") китабы менән күптән таныш булғанлығын, улай ғына ла түгел, Йыһан һәм Ер закондарын, уларҙың берлеген ошо төбөндә ун һаны тәғлимәте ятҡан китапҡа таянып өйрәнгәнлегенә баҫым яһай. Фәйзи Ғәскәров та халыҡтың йор аҡылына таянып ижад иткән кинәйәле бейеүен юҡҡа ғына "Өс таған" тип атамағандыр. Сөнки йор һүҙлелек тә дин менән бәйле, рухани донъяла "Дини кеше йор һүҙле булырға тейеш", тигән девиз йәшәп килә. Өсөнсөнән, "йуд" хәрефенең график кәүҙәләнеше бик бәләкәй генә булһа ла (бәләкәс өтөр кеүек), мәғәнәүи йөкмәткеһе бик ҙур - "киләсәк донъяны төҙөүсе". Хәреф рухи донъя үҫешен көсәйтеү өсөн уй менән хәрәкәттең ғәмәли берлектә эш итергә тейешлеген раҫлаусы йәшәү символы.

**Гөлфирә ҠОТЛОМӨХӘМӘТОВА.**

**(Дауамы. Башы 3-сө һанда).**

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Наркомандар һәм эскеселәр кемдәр?

Наркоманлыҡҡа ҡаршы "Бер тапҡыр ғүмер" (Одноразовая жизнь) тигән янау яҙылған ҙур плакаттар элеп кенә көрәшеү мөмкин түгел. Наркоманлыҡҡа ҡаршы полиция ысулы - кешеләрҙе ҡурҡытыу юлы менән шулай уҡ көрәшеп булмай. Уңышҡа илтеүсе берҙән-бер юл: наркотиктарға лайыҡлы алмаш табырға кәрәк. Бары икеһен генә атап китәм. Береһе - бер сәғәт дауамында бер туҡтауһыҙ ваҡ аҙымдар менән йүгереү. Икенсеһе - йога менән шөғөлләнгәндән һуң тәрән медитация. Ошо юлдар авторы ошо күнекмәләрҙең һәр ҡайһыһы ниндәй ләззәт килтереүен үҙендә татыған һәм бер генә наркотик таратыусы ла уны үҙ ҡапҡанына эләктерә алмаясаҡ.

Бөгөн барлыҡ дәүләттәр ҙә ошо яуызлыҡҡа репрессия ысулдары менән ҡаршы торорға тырышып, "ел тирмәне" менән көрәшә. Ҡулланыусы бар икән, таратыусы мотлаҡ табыласаҡ. Йәмғиәт балаларҙы киләсәктә улар араһында ошо ағыуҙы ҡулланырға теләүселәр булмаҫлыҡ итеп тәрбиәләргә тейеш. Әммә быны өсөн шундай тәрбиәне ғәмәлдә тормошҡа ашырырға һәләтле тәрбиәселәр әҙерләнеүе зарур. Беҙҙең педагогия вуздарында бындай уҡытыусыларҙы әҙерләмәйҙәр. Минең ышанысым үҙемдең йәштәрҙең буласаҡ остаздарын әҙерләүҙә туранан-тура ҡатнашыу тәжрибәмә нигеҙләнә. Мәктәптә эшләгәнемдә ата-әсәләргә: "Беҙ балаларҙы уларҙың башына спиртлы эсемлектәрҙе һәм наркотиктарҙы ҡулланыу уйы инеп тә сыҡмаҫлыҡ итеп тәрбиәләргә тейешбеҙ. Әйҙәгеҙ, уларҙы хатта үҙ туйҙарында ла, башҡа эсемлектәрҙе әйтеп тә тормайым, шампан шарабын да татып ҡарамаҫлыҡ итеп тәрбиәләйек. Хатта Өфөнөң барлыҡ наркотик таратыусылары беҙҙең балаларға үҙ тауарын тәҡдим итеп, тротуар буйлап теҙелеп баҫҡанда ла, улар ошо рәтте ҡаразирә татып ҡарау теләгенә бирелмәйенсә үтеп китерлек булһын". Шундай һүҙҙәрҙән һуң, балаларыбыҙҙы нисек күрергә теләйбеҙ - шулай үҫһен өсөн юлдар күрһәтә инем. Ә үҙемдең һөнәремде мин бар камиллығында үҙләштерҙем: тап синыф коллективында балаларҙа көслө ихтыяр һәм тимер характер тәрбиәләнем.

Спиртлы эсемлектәргә һәм наркотиктарға ылығыуҙың тәрән сәбәптәрен беҙгә ғәҙәти булған тормоштан ситтә эҙләргә кәрәк. Йәмғиәт ҡанундары буйынса йәшәргә һәләтһеҙ һәм күпселекте тәшкил итеүсе кешеләр ҡатламы бар. Бындай характерлы кешеләрҙе күпме генә "кешесә" йәшәргә өгөтләһәгеҙ ҙә уңышҡа өлгәшмәйәсәкһегеҙ. Улар тыуғандан уҡ аҡса туплап, һуңынан уны сит ил курорттарына барып ял итеү, автомобилдәр, келәмдәр һәм телевизорға туҙҙырыу өсөн көнө-төнө эшләүгә һәләтһеҙ. Бындай тормош улар өсөн түгел. Улар шулай уҡ ғәҙәти тормош атрибуттары булған билдәлелеккә, власҡа һәм данға ла мохтаж түгел. Уларҙың күңеле икенсе ҡиммәттәр, икенсе үлсәмдәр, ер кешеһенә хас түгел мөмкинлектәргә ынтыла. Әммә бик күп сәбәптәр арҡаһында уларға икенсе донъяға шомло ынтылыштарында ауыр, ләкин хәүефһеҙ юл табыу мөмкин түгел. Аңһыҙлыҡтары арҡаһында улар ваҡытынан алда вафат булып, Ерҙәге тормош менән сағыштырғанда насарыраҡ шарттарға әләгер юлды шарапта, наркотиктарҙа эҙләй.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**

**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

39. Иғтибарҙы туплауҙың ике минутлыҡ күнекмәһе бик файҙалы. Бары тик ике минут дауамында ҡул сәғәтегеҙҙең секундтарҙы һанаған уғына ҡарағыҙ һәм башҡа бер нәмә тураһында ла уйламағыҙ. Тәүҙә аңығыҙ тарҡау булыр, әммә 21 көнөнән һуң ошо күнекмәне башҡарғанда иғтиабырығыҙ бер нәмәгә лә тайпылмаясаҡ. Кеше үҙендә тәрбиәләй алған мөһим сифаттарҙың береһе - ул оҙаҡ ваҡыт дауамында иғтибарҙы бер нәмәгә туплау һәләте. Иғтибар туплау һәләтегеҙҙе үҫтерегеҙ һәм һеҙгә бөтөн нәмә еңел бирелер.

40. Нимәлер әйтер, һөйләр алдынан бер сынаяҡ йылы һыу эсегеҙ. Рональд Рейган һәр ваҡыт үҙенең яғымлы-матур тауышын һаҡлар өсөн ошо алымды ҡулланған. Халыҡ алдында сығыш яһау камиллығы - бик изге маҡсат. Үҙеңде ошоға өлгәшеүгә бағышлауҙа мәғәнә бар. Һеҙҙең хаҡта һөйләшеүегеҙ, аралашыуығыҙға ҡарап фекер йөрөтәсәктәр.

41. Кемделер көтәһегеҙ икән, тура һәм ышанысл торогоҙ. Иғтибары тарҡау һәм аң кимәле түбән кешенең күҙгә ташланып торған билдәһе булып даими тынғыһыҙлыҡ, йүгерек ҡараш һәм тәрән булмаған йыш һулыш тора.

42. Үҙегеҙҙе ышанысл тотоғоҙ һәм шундай буласаҡһығыҙ ҙа. Батыр булығыҙ һәм был сифатты башҡаларға ла "йоҡтороғоҙ". Ләкин һәр ваҡыт әҙәпле һәм ипле булып ҡалығыҙ.

43. Был донъя һеҙҙең өсөн нимә эшләй ала, тип түгел, ә мин был донъя өсөн нимә эшләй алам, тип һорағыҙ. Башҡаларға ярҙам итеүҙе тормошоғоҙҙоң иң мөһим маҡсаты итеп алығыҙ. Был - ваҡытты нимәгәлер бүлеүҙең иң ҡиммәтлеһе. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: тормош ахырында, бөтөн нәмә лә әйтелеп, эшләнәһе эштәр башҡарылып бөткәс, тормош сифаты һеҙҙең башҡаларға һалған өлөшөгөҙҙән сығып баһаланасаҡ. Үҙегеҙҙән һуң бай мираҫ ҡалдырырға тырышығыҙ.

44. Аҙнаһына бер тапҡыр ҡояш менән бергә тороғоҙ. Ул көндөң мөғжизәле ваҡыты. Тынысланығыҙ, йөрөп килегеҙ йәки күңелегеҙгә оҡшаған музыка тыңлағыҙ. Ашыҡмай ғына эҫе душта йыуынығыҙ һәм 100 тапҡыр тын алып, тынығыҙҙы сығарығыҙ. Классиктарҙың әҫәрҙәрен уҡығыҙ. Үҙегеҙҙе ҡанатлы һәм дәртле итеп тойорһоғоҙ.

45. Башҡаларҙан ситтәрәк, яңғыҙ булығыҙ. Бөтөн кешегә лә һеҙҙең хаҡта барыһын да белергә тимәгән. Үҙегеҙҙә серлелек элементын булдырығыҙ.

46. Халыҡ алдында сығыш яһау сәнғәтен камиллаштырығыҙ. Тәбиғәттән ораторлыҡ һәләте бирелеүселәр бик аҙ. Үҙегеҙ өсөн юғары йоғонтоло аралашыу оҫтаһын күҙ алдына килтерегеҙ һәм бар яҡтан да уға оҡшарға тырышығыҙ: ул нисек баҫып тора, шулай баҫығыҙ, уның кеүек йылмайығыҙ һәм һөйләгеҙ. Һөҙөмтәләр оҙаҡ көттөрмәҫ.

**Робин ШАРМА.**



## 28 ЯНВАРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.50 "Ты не один". Сериал (16+)
16.20 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
17.00 "Неравный брак" (16+)
